ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

9-15 февраль (шаҡай) 2024

№5 (1098)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Тормоштоң ыңғай яҡтарына ғына иғтибар туплаһағыҙ һәм камиллыҡҡа ынтылһағыҙ, тиҙҙән яҡшы яҡҡа үҙгәреүегеҙҙе һәм ыңғай сифаттарығыҙ барлыҡҡа килеүен тойорһоғоҙ. Тап ошондай ынтылыштар - ысын ғилем сығанағы һәм улар һеҙҙе яңы бейеклектәргә күтәрәсәк. Шуға күрә боронғо аҡылды онотоорға ярамай: тейешле белемегеҙ булғанда, был тормошта теләгән маҡсатығыҙға өлгәшә алырһығыҙ.*
*Робин ШАРМА.*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мәктәптәр ябылманы...



3

Бала өсөн...

башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәре мөһим



6

Милләттең бөйөк кешеләрен...



9,11

Улар Мортаза исемле




13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

КӨН ТЕМАҺЫ

# МОРТАЗА РӘХИМОВ ҺАЛҒАН ҺӘЙКӘЛ

**7 февралдә Башҡортостанда Беренсе Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улының тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы хәтер һәм ҡәҙер саралары уҙғарылды.**




Республика етәксеһе һәм халҡыбыҙҙың Рәсәй кимәлендә танылыу тапҡан күренекле шәхесе ҡәҙимге бер башҡорт ауылында тыуған, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, бала сағынан уҡ тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә татып үҫкән. Шуғалыр ҙа инде нефть эшкәртеү тармағындағы эшмәкәрлегендә лә, ил хәстәре менән йәшәгән етәкселек итеү осоронда ла уға бер төп сифат хас була: кешеләрҙең көндәлек тормошон нисек итеп булһа ла еңеләйтергә, яҡшыртырға ынтылыу. Ул ошо изге маҡсатына өлгәшә алды, улай булмаһа, халҡыбыҙ уны шундай ҙа өлгәр, итәғәтле, изгелекле һәм миһырбанлы зат итеп хәтерендә һаҡламаҫ ине. Эйе, тап бөйөк шағир А.С. Пушкин шиғырындағыса, ул үҙенә ҡулдан яһалмаған һәйкәл һалып ҡалдырҙы. Ул һәйкәл заманса технологиялы нефть эшкәртеү заводынан, тулыһынса тар-мар ителеүҙән һаҡлап алып ҡалынған ауылдарҙан, меңәрләгән саҡрымлыҡ асфальт юлдарҙан, газ индерелгән ауылдарҙан, бихисап яңы һәм төҙөкләндерелгән мәктәптәрҙән, дауаханаларҙан, мәҙәниәт һарайҙарынан һәм башҡа эреле-ваҡлы әллә күпме файҙалы эштәрҙән, халыҡтарыбыҙҙың рухи күтәрелешенән хасил булды.

**(Дауамы 5-се биттә).**

БАШ ҠАЛАМ

# ЮБИЛЕЙҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ...

**Өфөбөҙ үҙенең 450 йыллыҡ юбилейын билдәләргә йыйына. Был иҫтәлекле датаға ҡарата ҡалала күп эштәр башҡарылыуын күрә йөрөйбөҙ. Ысынында, әлеге мәлдә Өфө ҙур бер төҙөлөш майҙансығын хәтерләтә. Әлбиттә, бындай эштәр ҡала халҡына ниндәйҙер кимәлдә мәшәҡәттәр тыуҙыра, ләкин уларҙың барыһы ла ваҡытлыса. Юбилейын Өфө тағы ла матурыраҡ, унайлыраҡ булып ҡаршылаясаҡ.**

Күптән түгел Затон биҫтәһендә булдым. Унда Шмидт, Әхмәтов урамдары, Өфө - Затон юлы һәм Ағиҙел йылғаһы сиктәрендә төҙөлөп ятҡан Башҡортостандың Фехтование үҙәгенең мөһабәтлеге һоҡландырҙы. Төбәк һәм ил кимәлендә спортсыларҙы ҡабул итеү мөмкинлеге буласаҡ йәнә бер спорт үҙәгенең булыуы Өфөнөң мәртәбәһен тағы ла арттырасаҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ХӘТЕРЛӘП...

# ХАЛЫҠ ӨСӨН ЭШЛӘНЕ

**Мин республикабыҙҙың тәүге Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов менән 18 йыл бергә эшләнем. Ул БР Юғары Советына Рәйес булып килгәнсе беҙҙең район республика кимәлендә үгәйһетелгән бер бала кеүек ине, сөнки ул замандарҙа республиканың беренсе етәкселәре районыбыҙға бөтөнләй килмәне, тиһәк тә була: Нуриев та, Шакиров та берәр генә тапҡыр, уныһында ла Юлдыбай ауылында ғына һәм бары тик Баймаҡ йә Хәйбуллаға барышлай йә ҡайтышлай бер нисә минутҡа юл ыңғайы һуғылып ҡына киттеләр.**

Ә бына Башҡортостаныбыҙ етәксеһе булып Мортаза Ғөбәйҙулла улы эшләй башлағас, ул йыл һайын, хатта йылына ике-өс тапҡыр эш сәфәре менән беҙҙең яҡҡа килә торғайны: Хәйбуллаға барып етеп, машина менән шул араны көнөнә әйләнеп ҡайтып, Йылайырға махсус туҡтар булды, сөнки, алда әйтеп китеүемсә, районды социаль-иҡтисад хәле, шунын һөҙөмтәһе булараҡ, халыҡтың тормош-көнкүреше бигерәк мөшкөл ине. Мортаза Ғөбәйҙулла улы беҙгә килгәнендә лә туп-тура район үҙәгенә түгел, ә тәүҙә юл буйында ултырған ауылдарҙа туҡтап, халыҡ менән осраша, уларҙы иғтибар менән тыңлай, уларҙы ишетә, улар менән күҙмә-күҙ һөйләшә һәм шунан һуң ғына һығымталар яһай ине. Хатта әллә ҡайҙа ятҡан төпкөл ауылдарға ла барып сығыр ине. Мәҫәлән, минең тыуған ауылым - район үҙәгенән 60 км ятҡан Ашҡаҙарҙа ғына ла ул әллә ике-өс тапҡыр булып китте.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ТЕЛҺӨЙӘРЛЕК ТӘРБИӘЛӘЙБЕҘ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Фирҙәүес ХИСМӘТУЛЛИНА, Салауат ҡалаһының 25-се Башҡорт гимназияһы директоры:*** Оҙаҡ йылдар мәғариф өлкәһендә эшләйем. Әлбиттә, борсоған төп мәсьәләләрҙең береһе - ул балаларҙың мәктәпкә уҡырға төшкәндә туған телен белмәүе. Шуға тәү сиратта әйтер һүҙем ата-әсәләргә булыр: тыуғас та, биләүҙән үк әсә теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләй башлаһағыҙ, теле "әсәй", "атай" тип асылһа ине балағыҙҙың. Ә инде йәше еткәс, "Ниндәй мәктәпкә уҡырға бирәйек икән?" тигән һорау булырға тейеш түгелдер ҙә үҙен башҡортмон тип иҫәпләгән өлкәндәрҙә. Бына шундай нигеҙ һалынһа, ошо орлоҡтарҙы үҫтереүҙә артабан ата-әсәләргә беҙ ярҙамға килер инек. Һүҙ ҙә юҡ, беҙҙең Салауат ҡалаһының 25-се Башҡорт гимназияһы атай-әсәйҙәре был йәһәттән аңлы, беҙгә балаларын ҡаланың төрлө төбәктәренән уҡырға йөрөтәләр, рухлы, телһөйәр һәм илһөйәр итеп тәрбиәләүҙә эшебеҙгә ярҙам итеп торалар.

Әлеге көндә гимназиябыҙҙа 798 уҡыусы белем ала. Улар менән барлыҡ тәрбиә эштәре, саралар башҡорт телендә ойоштороla, рухи ҡиммәттәребеҙҙе йәш быуынға тапшырырға тырышабыҙ. Ошо маҡсаттан бер нисә йыл элек "Урал батыр мәктәбе" проектына ҡушылып киттек һәм башҡорт халҡының мәшһүр эпосында быуаттар һынауын үтеп һаҡланып килгән мәңгелек төшөнсәләрҙе аңлатырға, шуларға таянып, уҡыусыларыбыҙға аң-белем, тәрбиә бирергә тырышабыҙ.

Әйтергә кәрәк, үткән быуаттың 90-сы йылдарында бер аҙ һүлпәнәйеп киткән әхлаҡи һәм рухи тәрбиә, туған телгә булған ҡараштар бөгөн үҙгәрә, шөкөр. Ике йыл рәттән "Шайморатов кластары" астыҡ, ата-әсәләр оло теләк менән ризалыҡ бирҙе. Ғөмүмән, уҡыу йортобоҙға уҡыусылар йыйыу хәҙер ҡатмарлыҡтар тыуҙырмауы ла ҡыуаныслы: элекке һәр өйгә йөрөп, мәктәп йәшендәге балалары булған башҡорт ғаиләләренә аңлатыу эштәре менән йөрөгәнебеҙ хәтерҙән сыҡмаған әле.

Милләттәштәребеҙҙе тағы бер темаға уйланырға һәм мәсьәләне тулыһынса хәл итеп булмағанда ла, нисектер контролгә алырға саҡырам: балаларыбыҙ телефон, компьютер һәм башҡа гаджеттарҙа ваҡытын самаһыҙ күп үткәрә. Бының файҙаһынан зыяны күберәк, шул уҡ тәрбиә йәһәтенән дә. Мәктәптә булғандарында, әлбиттә, телефондарға бүленергә форсат бирелмәй, ә бына өйҙә, ата-әсәләрҙең эш араһында үҙҙәренә иғтибарҙы аҙ биреүе менән файҙаланалар. Бындай "ярай-ярамай" тигән тәрбиәнең нигеҙ өлөшө ғаиләлә һалынырға тейеш икәнен беләбеҙ һәм ошо юҫыҡта эшләргә кәрәк. Беҙгә лә, атай-әсәйҙәргә лә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

*ХӘТЕРЛӘП...*

# ХАЛЫҠ ӨСӨН ЭШЛӘНЕ



**(Башы 1-се биттә).**

Бер генә миҫал килтереп китәм: Йылайыр районының бик күп ауылдары үткән быуаттың 60-сы йылдар сәйәсәте буйынса алып барылған "перспективаһыҙ ауылдар" рәтенә инде һәм бик күп ауылдарыбыҙ юғалды, ситкә күсенеп китеүселәр байтаҡ булды. Шул зыянлы сәйәсәт арҡаһында районда кеше һаны ла бик кәмене. Әгәр 1959 йылда 96 ауылда 28 мең кеше йәшәгән булһа, 1989 йылға 57 ауылда 18 мең генә кеше ҡалғайны. Мортаза Ғөбәйҙулла улы килеп, беҙҙәге хәлдәрҙе күреп, район ауылдары халҡының йәшәү һәм тормош шарттарын яҡшыртыу буйынса социаль мәсьәләгә төп иғтибар бүлә башлағас, ул етәкселек иткән йылдарҙа бер генә ауылыбыҙ ҙа юғалманы, кеше һаны ла кәмемәне. Был Президентыбыҙҙың фәҡәт халыҡ өсөн эшләүе, уның көнкүреш хәлен яҡшыртыуға, ошо ауылдарҙа йәшәүсе төп халыҡты һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән атайҙарса иғтибары тураһында һөйләй ине.

Районда хәл ителәһе проблемалар бик күп ине, әлбиттә, шуға күрә Президентыбыҙ беренсе килгәнендә үк беҙгә эште иң тәүҙә юлдар һалыуҙан башларға тәҡдим итте, сөнки 21-се быуат башында йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, Йылайыр республикала берҙән-бер асфальтһыҙ-юлһыҙ, тигәндәй, өҫтәүенә, газ үткәрелмәгән район ине. Тиҙ арала районда беҙ үҙебеҙҙең юл төҙөү-ремонт участогы булдырып, 1993 йылда үҙебеҙҙә асфальт заводы төҙөп ултырттыҡ. Был хужалыҡтарҙа 150-нән ашыу кешегә эш урындары булдырылды. Шулай итеп, Президентыбыҙ хуплауы һәм ярҙамында ике йыл эсендә Өфөгә барыу юлының Йылайыр - Иҫәнғол араһында 50 км-ға яҡын асфальт юл һалынды. Был халыҡҡа баш ҡалабыҙға йомош-юл йөрөүҙе күпкә еңеләштерҙе, сөнки уға тиклем Өфөгә Сибайҙан поезд менән барып-ҡайтыу өсөн кәмендә өс көн кәрәк ине, ә хәҙер тура асфальт юлдан Өфөгә көнөнә барып әйләнеү мөмкинлеге тыуҙы. 1995 йылдың октябрь айында юлды файҙаланыуға тапшырғанда Мортаза Ғөбәйҙулла улы Хөкүмәт ағзалары менән үҙе килде.

Беҙ был юлды төҙөү менән генә сикләнеп ҡалманыҡ, Йылайырҙың барлыҡ республика юлдары асфальтҡа тоташтырылды, бынан тыш, 16 ауылдың төп урамдарына асфальт түшәлде. Тағы шуныһы ла бик мөһим эш булды: юлдар яҡшырғас, район үҙәге аша үтеүсе машиналар күбәйҙе, ә урамдар тар ғына - был, әлбиттә, бик ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра ине, шунлыҡтан Мортаза Ғөбәйҙулла улы халыҡ һорауын иҫәпкә алып, 1998 йылда Йылайырҙы 7 километрҙан урап үтеүсе юл һалдырырға ҡарар итте һәм шул юлда Йылайыр йылғаһы аша Көньяҡ Уралда иң ҙур - бейеклеге 38, оҙонлоғо 200 метр тәшкил иткән күпер ҙә төҙөлдө. Бөтөн ауыр һәм йөк машиналары хәҙер Йылайырға инмәй, ошо урау юлдан йөрөй башланы. Был ошо йүнәлештә республикала иң тәүге тәжрибә булды. Икенсе төп мәсьәлә - районға газ үткәреү ҙә шулай уҡ Мортаза Ғөбәйҙулла улы булышлығында бойомға ашырылды. Элек утын яғып көн күргән район халҡының 70 проценты бөгөн зәңгәр яғыулыҡ менән файҙалана һәм был, әлбиттә, көнкүреш шарттарын күпкә еңеләштерҙе.

Ғөмүмән, әйтергә кәрәк, тәүге Президентыбыҙ халыҡ тормошона ҡағылышлы бер генә мәсьәләне лә күҙҙән ысҡындырманы: халыҡтың сәләмәтлеге, демография, балалар өсөн мәктәптәр һалыу, мәҙәниәт объекттары төҙөү тиһеңме - бөтәһе лә уның шәхси контролендә булды. Районда яңынан-яңы социаль йүнәлешле төҙөлөштәр алып барылды. Мәҫәлән, Юлдыбайҙа лицей уҡыусылары өсөн дөйөм ятаҡ, яғыулыҡ станцияһы, дауахана, физкультура-һауыҡтырыу комплексы, Матрайҙа Быҙаулыҡ һыу һаҡлағысы, Бәрҙәш, Йомағужала - мәктәп, район үҙәгендә гимназия һәм башҡалар - һанап бөтөрөрлөк түгел.

Район халҡы, тәбиғи, бындай изгелектәре өсөн, бөтөн республикабыҙ граждандары кеүек үк, арҙаҡлы етәксебеҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улын лайыҡлы рәүештә ҙурланы, ихтирам итте һәм һәр килеүен көтөп алалар ине. Йылайырҙың - 250, Юлдыбай ауылының 800 йыллыҡ юбилей сараларында ла Президентыбыҙ районыбыҙҙың ҡәҙерле ҡунағы булды. Һәм, ғөмүмән, ул һәр ауыл-ҡала үҙ кеше булып танылды. Мин уның кешеләр менән кеселекле, туғандарса йылы аралашыуын, яйы сыҡҡанда үҙенә генә хас юмор менән шаяртып та алыуын һәм әңгәмәселәрен үҙенең ихласлығы, ябайлығы менән йәлеп итеүе кеүек сифаттарына һоҡлана инем. Был, әлбиттә, уның ҙур, абруйлы етәксе булараҡ ниндәйҙер аралашыу алымы түгел, ә яҡшы, изгелекле шәхес, халыҡ араһынан сыҡҡан үҙебеҙҙең яҡын кешебеҙ булараҡ ябайлығы, характер асылы ине...

**Юнир ВӘЛИЕВ,**
**1993-2011 йылдарҙа Йылайыр район хакимиәте башлығы, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, Салауат Юлаев ордены кавалеры.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ЮБИЛЕЙҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ...

**(Башы 1-се биттә).**

Баш ҡалалағы тағы ла бер уникаль проект - "Өфө муйынсағы" - халыҡтың ятаҡан ял итеү урынына әйләнде. Ҡаланың бөтә яр буйы һыҙатын үҙ эсенә алған велосипедта һәм йәйәү йөрөү маршрутының дөйөм оҙонлоғо 70 саҡрымдан ашыу буласаҡ, тип көтөлә. Ҡаланың алты районын үҙ эсенә аласаҡ һәм һигеҙ участканан торасаҡ "Өфө муйынсағы"нда туристик һәм рекреацион киңлектәр берләштерәсәк, парк инфраструктураһы үҫтереләсәк. Ҡала хакимиәтендә белдереүҙәренсә, төҙөлөштөң бөтә этаптары тамамланғандан һуңында 400 меңдән ашыу кеше ял итә аласаҡ. Әле үк мин үҙем йәшәгән Шәфиев урамы янынан үткән участкала кешенең күпләп ял итеүен күреп йөрөйөм. 6-сы дауахана янындағы Башҡортостандың Милли музейы тарафынан эшләп ҡуйылған мәғлүмәти-археологик стендтар янында ла һәр ваҡыт баш ҡала археологияһы менән ҡыҙыҡһыныусылар өҙөлмәй.

Минең оҙаҡ йылдар күңелемде ҡырып торған күренеш - Каруанһарай алдындағы матур фонтанды алып ташлауҙары. Фонтан булғанда был тирә матур ял итеү урыны ине, ә хәҙер был майҙан тик кафе, ҡапҡылап алыу, ресторан һәм башҡа ошондай туҡланыу ойошмалары менән тулған. Ул яҡҡа барһам, үҙемде иҫ киткес ҙур ашханаға барып эләккәндәй тоям.

Был яҡтар тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, Совет майҙаны тураһында ла әйтеп үткем килә. Машиналар менән тулы туҡталҡа урынына матур ял итеү урыны эшләп ҡуйыуҙары бик оҡшай.

Үҙәктән Черниковка биҫтәһенә күсеп, ундағы "Беренсе май" паркын маҡтағым килә. Балалар һәм спорт майҙансыҡтары, амфитеатр, кафелары булған, төрлө арт-объекттар менән тулыландырылған парктан сыҡҡы ла килмәй.

Беҙҙең Өфөбөҙ заман менән бергә атлаған, сағыу, үҙенә генә хас мөхите булған, ҡунаҡсыл ҡала. Был матурлыҡты беҙ оло юбилейға йыйыласаҡ кешеләрҙең барыһына ла күрһәтергә тейешбеҙ.

**Сәғит ИСЛАМБАЕВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, шулай уҡ республиканың ғилми һәм ижади берләшмәләре вәкилдәре менән осрашыуҙа Радий Хәбиров 2024 йылда "Әр-Рәхим" мәсете төҙөлөшө хаҡында һөйләне. "Мәсет төҙөлөшөндә төп мәсьәлә финанслауға ҡайтып ҡала. Беҙ барыһын да хәл итеү юлын таптыҡ. Эске биҙәкләү эштәре өсөн күп ваҡыт кәрәк. Әммә ниәтебеҙ етди, беҙ аҡса таптыҡ. Быйыл - 700 миллион һум. Киләһе йылға беҙҙә миллиард бар. Уларҙы ҡайҙан алырыбыҙҙы ла беләм. Әле йөҙләү эштәренән башланыҡ, һуңынан эске яҡтың проектын эшләрбеҙ. Әлбиттә, мәсетте төҙөп бөтөрбөҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓2023 йылда Башҡортостанда рекордлы 3 миллион 315 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. "2022 йыл менән сағыштырғанда үҫеш 8,3 процент. Яҡшы күрһәткес, ул социаль өлкәне һәм иҡтисадтың тотороҡлолоғон күрһәтә. Хәтерегеҙгә төшөрәм, Президент ҡушыуы буйынса 2023 йылға беҙ 4 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөргә тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров. Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, былтыр Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙа 1,25 миллион квадрат метр һәм 2,05 миллион квадрат метр шәхси торлаҡ төҙөлгән.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика етәкселеген Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" паркында курсанттар менән осрашыуҙар ойоштороrға саҡырҙы. "Патриот" паркын хәрби-патриотик тәрбиәгә әүҙем йәлеп итә башланыҡ, хәҙер унда һөнәри колледж уҡыусылары һәм мәктәптәрҙең өлкән класс уҡыусылары менән даими осрашыуҙар бара. Бөтә шарттар ҙа бар. Мин осрашыуҙарҙы дауам итермен, сөнки егеттәрҙе борсоған мәсьәләләр тураһында һөйләргә кәрәк. Етәкселәребеҙгә лә ошондай сараларҙа ҡатнашырға кәрәк тип уйлайым", - тине Хәбиров.

✓Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһынан хәбәр итеүҙәренсә, Руслан Зәйнуллинды Башҡортостан Республикаһы Үҙәк Һайлау комиссияһының хәл иткес тауышҡа хоҡуҡлы ағзаһы итеп тәғәйенләнеләр. Мәғлүмәткә ярашлы, кандидатураны "Йәшелдәр" Рәсәй экологик партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе советы тәҡдим иткән. Руслан Зәйнуллин - Өфө фән һәм технологиялар университетының Хоҡуҡ институты етәксеһе. Юридик фәндәр докторы.

ХӘТЕРЛӘП...




# МӘКТӘПТӘР ЯБЫЛМАНЫ...

**Мортаза Ғөбәйҙулла улы минең хәтеремдә һәр ваҡыт халыҡ хәстәрлеге менән янып-көйөп, республикабыҙ өсөн мөһим һәм бик тә кәрәкле проекттарҙы бойомға ашырыу хәстәрлеге менән ал-ял белмәй эшләүсе, һүҙе менән дә, эше менән дә алдынғы ҡарашлы, эшлекле етәксе булып ҡалды. Уны һәр ваҡыт юлда, ауылдарҙа йә производство объекттарында һәм мотлаҡ ябай эшсәндәр йә булмаһа яңы төҙөткән мәктәптәрҙе асыу тантанаһында балалар араһында осратырға була ине.**

Башҡортостаныбыҙ өсөн уның башҡарған эштәренең иҫәбе-һанына ла сығырлыҡ түгел. Айырыуса ул ауылдарҙы аяҡҡа баҫтырыуға, ауыл тормош-көнкүрешен еңеләйтеүгә, унайлыраҡ итеүгә күп көс һалды. Ваҡытында уның Борис Ельцин күрһәтмәһен үтәмәйенсә, колхоз-совхоздарҙы һаҡлап алып ҡалыуы ауылдарҙы үҫтереүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булды: юлдар һалынды, ауыл өйҙәренә газ үткәрелде, мәктәптәр төҙөлдө. Әйткәндәй, ул мәктәптәрҙең йәшәүен һәм эшләүен ауылдарҙың киләсәгенә бәйләп фекер итте. Беҙ, уҡытыусылар, уның, ауылда хатта бер генә бала тороп ҡалған хәлдә лә мәктәп эшләргә тейеш; мәктәп булмаһа, ауыл да булмаясаҡ, тигән ҡанатлы һүҙҙәрен легендаға тиңләп ҡабул иткәйнек.

Башҡортостанда белем биреү системаһы һәр ваҡыт Президентыбыҙҙың күҙ уңында булды. Шуның өсөн дә уның исемен мәңгеләштереү саралары рәтендә беҙҙең гимназияға уның исемен бирергә ҡарар итеүҙе коллективыбыҙ өсөн юғары баһа ла, ҙур яуаплылыҡ булараҡ та тулҡынланып ҡабул иттек. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ республикала тәүгеләрҙән булып Мортаза Ғөбәйҙулла улының исемен мәңгеләштереүҙе бойомға ашыра башланыҡ. Беренсе сиратта Мортаза Рәхимов исемендәге кабинет астыҡ. Был кабинет диуарына уның рәсемен төшөрҙөк, тормош юлына бағышлап, айырым стенд эшләнек, фототека һәм уның хаҡында мини-китапхана тупланыҡ. Йөкмәткеле һәм бай мәғлүмәтле кабинет-музейҙағы материалдарҙы уҡыусылар айырыуса ҡыҙыҡһынып өйрәнә.

Ике йыл рәттән гимназиябыҙҙа "Рәхимов уҡыуҙары" фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙғарабыҙ. Икенсе тапҡыр үткәреләсәк конференция быйыл төбәк-ара кимәлдә үтәсәк, сөнки сарала Ҡаҙағстан Республикаһы менән Ырымбур өлкәһе уҡыусылары ла ҡатнашасаҡ. Фәнни-ғәмәли конференцияла Мортаза Рәхимовтың тормош юлы, шәжәрәһе, сәйәсмән булараҡ эшмәкәрлеге, теге йә был уҡыусының ғаилә тормошонда, тыуған төйәге үҫешендә Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкселек иткән йылдарҙың әһәмиәте тураһында секцияларҙа балалар үҙ эштәре менән сығыш яһаясаҡ. Был сара, мәғариф һәм фән министры бойороғона ярашлы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ менән берлектә ойошторола.

Республикабыҙ ғына түгел, Рәсәй кимәлендәге тарихи һынылыш осоронда яңы Башҡортостаныбыҙҙы төҙөү хаҡына бөтөн көсөн, белемен, тәжрибәһен биреп эшләгән арҙаҡлы шәхес - Беренсе Президентыбыҙ исемен мәңгеләштереүгә арналған һәм уның тыуыуына 90 йыл тулыуға бағышланған мәртәбәле сара уҙғарыуыбыҙ менән дә сикһеҙ ғорурланабыҙ. Ил ағаһының балаларға, йәш быуынға булған аталарса йылы хәстәрлеген белмәгән, тоймаған кеше ҡалмағандыр. Шуға ла республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән киләсәк барлыҡ ҡунаҡтар ҙа юбилей сараларында әүҙем ҡатнашырҙар, уға оло ихтирамдарын күрһәтерҙәр, тип ышанабыҙ. Гимназиябыҙҙа быйыл март айында федераль программаға ярашлы капиталь ремонт башлана. Ошо эштәр мәлендә уҡыу бинаһына ингән урында Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың барельефы эшләнәсәк. Бөләкәйҙән белемгә ынтылып, йәшләй генә кәрәкле һөнәргә эйә булған ябай ауыл балаһының Президент дәрәжәһенә күтәрелеүендә фәҡәт белемгә ынтылыш, тырышлыҡ һәм тыуған илде һөйөү тойғоһо ята икәнен көн һайын мәктәп ишеген асып ингән һәр бала аңлаһын һәм уны Президентыбыҙ йөҙөндә күрһен ине, тигән теләктәбеҙ.

**Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ,**
**Күмертау ҡалаһындағы Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҠОН ҠАЙТАРЫУ ДАУАМ ИТӘ




**"Кисә беҙҙең өсөн Яҡын Көнсығышта ауыр көн булды. Беҙ яуапһыҙ ҡалмаясаҡбыҙ", - тип белдерҙе үткән аҙнала АҠШ президенты Байден Көньяҡ Каролиналағы һайлау алды сараларының береһендә һәм бер минут тынлыҡ иғлан итте. Пентагон башлығы Ллойд Остин да ошондай уҡ рухтағы белдереүҙәр менән сығыш яһаны һәм: "Беҙ президент менән Америка көстәренә ҡаршы һөжүмдәргә түҙеп тормаясаҡбыҙ һәм АҠШ-ты, ғәскәребеҙҙе, шулай уҡ үҙ мәнфәғәттәребеҙҙе һаҡлау өсөн бөтәһен дә эшләйәсәкбеҙ",- тип белдерҙе.**

Был "үс алыу анты" Иорданиялағы Америка хәрби базаһына пилотһыҙ осоу аппаратының төшөп шартлау һөҙөмтәһе ине. Ираҡтың "Ислам ҡаршы тороу көстәре" быны үҙ ғәмәле булараҡ таныны һәм Штаттарҙың Израилгә ярҙамы туктамаған хәлдә, һөжүмде артабан да дауам итәсәктәрен белдерҙе. Ғөмүмән, ошо сәбәпле, Яҡын Көнсығыштағы Америка базалары 150 тапҡыр һөжүмгә дусар ителде. Был йәһәттән айырыуса АҠШ-тың законһыҙ рәүештә Сирияла урынлашҡан хәрби базаһы йыш утҡа тотола. Ә әлеге һуңғы һөжүм һөҙөмтәһендә өс хәрби хеҙмәткәр һәлāк була, 30-ҙан ашыу америкалы яралана. Яуап рәүешендә Америка Ираҡ менән Сирияға ракеталар яуҙыра башланы. Хәрбиҙәр һәм тыныс халыҡ араһында ҡорбандар бар. Юғалтыуҙар айҡанлы Ираҡта өс көнлөк траур иғлан ителде.

Ошо хәлдән һуң да әле АҠШ Бөйөк Британия менән берлектә Йемен биләмәләрен, атап әйткәндә, хуситтарҙың ер аҫты ҡорал складтарын, ракета системаларын аяуһыҙ утҡа тотто. Ут ҡойоно Иранды урап үтһә лә, президентлыҡҡа дәғүә итеүсе Трамп һәм уның фирҡәҙәштәре "утҡа май һибеп" маташа һәм боевиктарҙы ҡурсалаусы Ирандың "арт һабағын" уҡытырға ҡоторта. Шулай ҙа АҠШ Иран менән асыҡтан-асыҡ бәрелешкә барыуҙан тыйыла, сөнки Иран сит ил эштәре министры Насер Канаани белдереүенсә, төбәктәге ҡаршы тороу көстәре Иран күрһәтмәләре һәм бойороҡтарына буйһонмай, улар үҙҙәренә үҙҙәре баш.

Ә бына президентлыҡҡа дәғүә итеүсе ирекле кандидат Корнел Уэст АҠШ властарының Израиль менән берлектә Газа секторында алып барылған геноцид сәйәсәтен ҡырҡа тәнҡитләп, Байденды хәрби енәйәтсе тип атаны. Шуны раҫлағандай, АҠШ президенты Ираҡ менән Сирияға бомба яуҙырыу менән бергә сикләнмәйенсә, Вашингтондың Америка һалдаттары үлеме өсөн "ҡайһы ваҡытта һәм ҡайһы урында икәнлекте үҙҙәре һайлап", яуап биреүҙе дауам итәсәген белдерҙе. Яҡын Көнсығыштағы көсөргәнеш һәм тотороҡһоҙлоҡ айҡанлы, Рәсәй ошо хәлдәрҙе БМО-ның Хәүефһеҙлек советына тикшереүгә ҡуйыуҙы һорап мөрәжәғәт итте. Әйткәндәй, Газа секторындағы хәлдәр, Сирия, АЭС, Украина конфликты, шулай уҡ иген коридоры мәсьәләләре Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Төркиәгә эш сәфәрендә Эрдоған менән осрашыуының төп темалары булып торасаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә асылған "Рәсәй" күргәҙмә-форумында Башҡортостан телевидениеһы көнө булды. Башҡортостан стенды БСТ телеканалы төҫтәре менән балҡыны, майҙансыҡта билдәле журналистар эшләне. Бында һәр кем республика тарихы менән нығыраҡ танышырға, шулай уҡ үҙҙәрен алып барыусылар ролендә һынап ҡарарға һәм ил халҡына сәләм еткерергә мөмкин. Журналистарыбыҙ сәғәт һайын тиерлек ваҡиға урынынан тура эфирға сыҡты. Махсус күҙлек менән Башҡортостан буйлап VR-экскурсияла йөрөү, шулай уҡ республиканың төп телеканалы эфирында сәләм еткереү мөмкинлеге булды. Сара ҡунаҡтары күргәҙмәгә һоҡланыуын белдерҙе.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитеты ултырышында ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова бала тәрбиәләгән студент ғаиләләре өсөн айлыҡ пособиены арттырыу пландары хаҡында һөйләне. "Пособие 250 һум тәшкил итә. Шуға күпселек ғаиләләр уны юлларға тырышмай. Әле 30 ғаиләгә генә ошондай пособие түләнә. Беҙ пособиены кәмендә 10 тапҡырға, айына 2,5 мең һумға тиклем арттырырға тигән тәҡдим менән сығыш яһаныҡ. Хәҙер шуның өҫтөндә әүҙем эшләйбеҙ", - тип хәбәр итте министр.

✓Учалы филармонияһында Ғаилә йылына бағышланған "Етегән йондоҙ" фольклор коллективтарының асыҡ фестивале уҙҙы. Унда Башҡортостандың төрлө райондарынан һәм Силәбе өлкәһенең Мейәс ҡалаһынан йәмғеһе 16 коллектив ҡатнашты. Балалар коллективтары араһында гран-приға Ахун ауылы Балалар сәнғәт мәктәбе филиалының "Ынйыҡай" фольклор ансамбле лайыҡ булһа, өлкәндәр араһында "Хазина" халыҡ фольклор ансамбле еңеү яуланы. Ике ансамбль дә - Учалы районынан. Проект милли мәҙәниәткә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуға, сағыу фольклор коллективтарын популярлаштырыуға йүнәлтелгән.

✓Башҡортостандың Беренсе Президентының тыуыуына 90 йыл тулыуға арнап, "Юлдаш" радиоһында башҡорт яҙыусыһы Ғәлим Хисамовтың Мортаза Рәхимов тураһындағы документаль романының аудиоверсияһы яҙҙырылды. Тексты Башҡортостандың халыҡ артисы, Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Илдар Ғүмәров уҡыны. Аудиояҙманың төп өлөшө фондта һаҡлана.

***✓ Волга буйы федераль округында иң күп йәштәр беҙҙә. 1 миллион 85 мең кеше. Шуға күрә беҙгә кампус кәрәк ине. Йыл һайын беҙҙә бюджет урындарына ҡабул итеү арта. Әммә дөйөм ятаҡтар етмәй. Шуға кампус конкурсында ҡатнаштыҡ.***



ҠЫҪҠАСА

# ДЕПУТАТТАР ҘА...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының тағы бер депутаты Яков Кугубаев үҙ теләге менән махсус хәрби операция биләмәһенә юллана.** Бынан алдараҡ Башҡортостан парламенты депутаты Алексей Локотченко махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итергә теләк белдерҙе, тип хәбәр иткәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы. Ир-егеттәрҙең был аҙымы ғорурлыҡ тойғоһо уята, тип билдәләне Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Депутаттар менән бергә уларҙың ярҙамсылары ла үҙ теләге менән махсус хәрби операция зонаһына юллана. Башҡортостан парламентында билдәләүҙәренсә, Алексей Локотченко һәм Яков Кугубаев гуманитар ылау менән бер нисә тапҡыр Донбасҡа барып ҡайтты, фронт янындағы биләмәләрҙә барған хәл-ваҡиғаларҙы үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Шунан һуң улар махсус хәрби операцияның бурыстарын үтәгән яҡташтары менән тыуған илебеҙгә хеҙмәт итергә тигән ҡарарға килде. Әле улар хәрби әҙерлек үтеү урынында. Февраль башында махсус операция биләмәһенә йыйыналар.

✓**Илдең Оборона министрлығы 2023 йылға йомғаҡ яһап, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам сараларының нисек бойомға ашырылыуы хаҡында һөйләне.** Ведомство мәғлүмәттәренә ярашлы, былтыр миллион ярым кеше хәрби хеҙмәт үтергә ғариза биргән. Уларҙың 490 меңе үҙ теләге менән контракт төҙөгән. Махсус операция барышында 320 мең хәрби дәүләт наградалары менән билдәләнгән, 272 кеше Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған. Республикабыҙҙан ете ир-егет - өлкән лейтенант Степан Белов, гвардия майоры Борис Дудко, подполковник Денис Чернавин ошо юғары исемгә лайыҡ булған, ә десантсылар взводы командиры, старшина Алмаз Сафин, танкист, өлкән лейтенант Игорь Насибуллин, разведчик, өлкән лейтенант Максим Серафимов һәм прапорщик Тамерлан Илһамов үлгәндән һуң бүләкләнгән. 56 мең яугирҙың ғаиләһенә торлаҡ бирелгән. Торлаҡ һатып алыуға һәм төҙөүгә субсидия рәүешендә 73 миллиард һум бүленгән. Тулыраҡ мәғлүмәт - Рәсәйҙең Оборона министрлығы карточкаларында.

✓**"Әзербайжан халыҡтарының әзербайжан милли-мәҙәни үҙәге" төбәк йәмәғәт ойошмаһы Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы йортона Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимов төшөрөлгән үҙенсәлекле келәм бүләк итте.** "Келәмде үҙ ваҡытында Мортаза Ғөбәйҙулла улының дуҫы, Башҡортостан Республикаһы Тышҡы бәйләнештәр һәм сауҙа министрлығының Әзербайжандағы вәкиле Азиз Аскеров бүләк итергә теләгәйне, - тип хәбәр итә учреждениеның матбуғат хеҙмәте. - Үкенескә күрә, был ниәткә бойомға ашырға яҙманы. Азиз Тофик улының ғаиләһе Мортаза Рәхимовтың тыуыуына 90 йыл тулыу уңайынан һәм ошо дуҫлыҡ хөрмәтенә келәмде Башҡортостанға Халыҡтар дуҫлығы йорто аша тапшырырға ҡарар итте".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СТУДЕНТҠА ШАТЛЫҠ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәйҙә заманса университет кампустары селтәрен асыу тантанаһында видеоэлемтә аша ҡатнашты. Уға Башҡортостанда, Мәскәүҙә, Пермь крайында, Татарстанда, Юграла төҙөлгән объекттар күрһәтелде. Төбәк башлыҡтары һәм юғары уҡыу йорттары етәкселәре Путинға һәр проект тураһында ентекләп һөйләне.**

"Өфө, ысынлап та, илдә ҙур белем биреү үҙәктәренең береһе. Радий Фәрит улы, һүҙ һеҙгә", - тине дәүләт башлығы. "Хөрмәтле Владимир Владимирович! Биш йыл элек беҙ һеҙгә республикала фән һәм юғары мәктәп инфраструктураһын яңыртыу тәҡдимдәре менән мөрәжәғәт иткәйнек. Һеҙ уларға ныҡ ярҙам иттегеҙ, - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Иң тәүҙә ике университет нигеҙендә асылған Өфө фән һәм технологиялар университетын астыҡ. Әле унда 51 мең студент уҡый. Донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәге асылды, ул алты юғары уҡыу йортон, өс фәнни учреждениены һәм 30 индустриаль партнерҙы берләштерә.

Беҙҙә йәштәр күп. 1 миллион 85 мең кеше. Волга буйы федераль округында иң күп йәштәр беҙҙә. Шуға күрә беҙгә кампус кәрәк ине. Беҙ Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем министрлығына бик рәхмәтлебеҙ. Ни өсөн? Йыл һайын беҙҙә бюджет урындарына ҡабул итеү арта. Әммә дөйөм ятаҡтар етмәй. Шуға кампус конкурсында ҡатнаштыҡ. Бөгөн беҙ кампустың беренсе сиратын күрһәтәбеҙ. Бында 37 мең квадрат метр майҙанды биләгән ғилми-белем биреү мөхите, 20 лаборатория бар. Студенттар ижады һәм эшҡыуарлыҡ өсөн мөхит бар. Беҙ инде икенсе сиратты проектлауҙы тамамлайбыҙ.

Владимир Владимирович, һеҙҙе Башҡортостанда һәр саҡ көтөп алабыҙ. Республикаға ярҙамығыҙ, йылы мөнәсәбәтегеҙ өсөн бик рәхмәтлебеҙ. Әлбиттә, ошо кампусты ла күрһәтергә теләйбеҙ, ғөмүмән, ул Рәсәйҙә фәндә һәм мәғарифты үҫтереүгә өлөш индерер тип ышанабыҙ". Дәүләт башлығы саҡырыу өсөн рәхмәт әйтте һәм республикаға килергә вәғәҙә бирҙе.

# МОСТАФИН ИСЕМЕНДӘГЕ...

**Башҡортостан ҡалаларында һәм ауылдарында төҙөлә башлаған заманса спорт объекттары ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки улар халыҡҡа, бигерәк тә балаларға һаулығын нығытырға мөмкинлек бирә.**

Был хаҡта Радий Хәбиров баш ҡалабыҙҙың Өлфәт Мостафин исемендәге физкультура-һауыҡтырыу комплексына барған саҡта белдерҙе. Республика етәксеһе физкультура-һауыҡтырыу комплексы майҙансыҡтарын, спорт ҡоролмаһының эске инфраструктураһын ҡарап сыҡты. Өлфәт Мостафин исемендәге физкультура-һауыҡтырыу комплексы 2022 йылда төҙөлә башланы. Ул Өфөнөң Менделеев урамындағы "Аҡ Йорт" тау саңғыһы комплексы һәм ВДНХ-Экспо араһында урынлашҡан. Өс ҡатлы бинаның дөйөм майҙаны 9,5 мең квадрат метр тәшкил итә. Комплекс дүрт өлөштән тора, боҙ аренаһы, универсаль спорт, көрәш, тренажер залдары, шулай уҡ ике бассейн бар. Объект әҙер тиерлек, ул быйыл февралдең икенсе яртыһында файҙаланыуға тапшырыла. Әле төҙөүселәр төҙөләш-монтаж эштәрен тамамлап килә.

Өлфәт Мостафин исемендәге физкультура-һауыҡтырыу комплексында балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә шөғөлләнергә мөмкин, тип билдәләне Радий Хәбиров. "Калабыҙ, Башҡортостан өсөн һәр спорт объекты мөһим, сөнки бында балалар ҙа, өлкәндәр ҙә килеп, спорт менән шөғөлләнә, физик һаулығын нығыта ала. Объект үҙенсәлекле. Бында бассейн, боҙ аренаһы, ҙур тренажер һәм уйын залдары бар. Февралдең икенсе яртыһында объект үҙ ишектәрен асырға әҙерләнә. Шәп урын һайланыҡ, был районда ошондай спорт үҙәге бик кәрәк ине. Беҙ Башҡортостанда спортты, шул иҫәптән балаларҙыҡын үҫтереүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Юбилей объекттарынан тыш, бизнес ҡатнашлығында, дәүләт-шәхси партнерлыҡ буйынса бер нисә спорт залы төҙөйбөҙ. Беҙҙә физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеүгә ҡыҙыҡһыныу арта бара. Шуға күрә республикала һәм баш ҡалабыҙ Өфөлә спорт инфраструктураһын төҙөү эштәрен дауам итәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

# АУЫЛ ЭШҠЫУАРЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә эшҡыуарлыҡ башланғыстарына булышлыҡ итеү һәм республиканың тораҡ пункттарында тормошто яҡшыртҡан проекттар тураһында яҙып сыҡты. Республика етәксеһе Федоровка районы эшҡыуары Дамир Шәриповты миҫалға килтерҙе.**

"2023 йылда Бала Сытырман ауылында йәш егет Дамир Шәрипов автозаправка асты. Бәләкәй ауыл өсөн мөһим ваҡиға. Яҡындағы яғыулыҡ ҡойоу станцияны 25 саҡрым алыҫлыҡта, район үҙәгендә урынлашҡан булған. Хәҙер Бала Сытырманда ла модулле автозаправка бар. Бында - АИ-92 маркалы бензин һәм дизель яғыулыгы менән ике колонка урынлаштырылған. Ике яңы эш урыны барлыҡҡа килде. Эшҡыуар заправка төҙөү идеяһын дәүләт ярҙамы менән ғәмәлгә ашырҙы. Башҡортостанда юл яны сервисын үҫтереү - өҫтөнлөклө йүнәлештәребеҙҙең береһе, ошондай башланғыстарға һәр саҡ ҙур иғтибар бүләбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Билдәле булыуынса, Дамир Шәрипов үҙенең проекты менән 2022 йылдың ғинуарында район хакимиәтендәге эшҡыуарлыҡ сәғәтендә таныштырған. Шунан һуң уға ер участкаһы алырға һәм инженер селтәрҙәрен үткәрергә ярҙам иткәндәр. Киләсәктә тағы ла бер нисә АЗС асыу ниәте бар. "Дамирға һәм үҙ маҡсатына ынтылған барлыҡ эшҡыуарҙарға уңыштар теләйем! Эште ниҙән башларға йәки бизнесты үҫтереү өсөн ярҙам саралары тураһында белмәйһегеҙ икән, investrb.ru порталы һәм беҙҙең бизнес-шерифтар командаһы ярҙамға килер", - тип өҫтәне Башҡортостан Башлығы.

# "АЙЫҠ АУЫЛ" БӘЙГЕҺЕНӘ...

**2024 йылда "Айыҡ ауыл" конкурсының приз фонды 48 миллион һумға тиклем арттырылды. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова белдерҙе.**

"Конкурстың приз фонды 2024 йылдан 8 миллион 400 мең һумға арта, - тине Эльвира Айытҡолова. - Был бик ҡыуаныслы, сөнки ауылдарҙа тәҙәкләндереү буйынса тағы ла күберәк эштәр башҡарылыр, халыҡ үҙ хеҙмәтенең һәм тырышлығының һөҙөмтәләрен күрер".

Шуны әйтергә кәрәк: ауылдарҙа йәшәүселәр конкурста ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡатнаша. Уҙған йылдың 1 сентябренән 30 ноябренә тиклем дауам иткән муниципаль этапта 1070 ауыл биләмәһе ҡатнашты. Республика этабына 52 ауылдан ғариза килде. Быйыл 18 ғинуарҙа республика ойоштороу комитеты ултырышында ауылдар 4 номинацияға бүленде. Йомғаҡ 25 апрелдә Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында яһала.

Башҡортостанда "Айыҡ ауыл" конкурсы ярҙамында социаль әһәмиәтле мәсьәләләр хәл ителә. Эскелек менән көрәшеүҙән тыш, конкурс төҙөкләндереү мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлтелгән. Дүрт йылда конкурста ҡатнашыусылар биләмәһендә 30 яңы балалар һәм спорт майҙансығы, 12 парк һәм йәмәғәт биләмәһе барлыҡҡа килгән, урамдар төҙөкләндерелгән, яңы коммуналь техника һәм хатта һыу һурҙырғыс башняһы бар, тип яҙғайны "Башинформ" агентлығы.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала хакимиәтенең Капиталь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы 2024-2025 йылдарҙа берәҙәк хайуандарҙы аулау, уларҙы артабан приюттарҙа ҡарау, медицина операцияларҙы яһау өсөн подрядсы һайлаясаҡ. Контракттың башланғыс хаҡы - 47, 7 миллион һум, ул республика бюджетынан бүленә. Документҡа ярашлы, 1 этте аулауҙың хаҡы 355 һум, бесәйҙе - 268. Стерилләү хаҡы этте 1,7 һәм бесәйҙе 1, 5 мең һумға төшә. Карантин һәм операцианан һуң этте приютта ҡарауҙың хаҡы 1, 07 мең һум, бесәйҙе - 408 һум. Агрессив этте приютта ҡарау өсөн көнөнә 55 һум кәрәк, бесәй 19 һумға төшәсәк.

✓Өфөлә Рәсәйҙең почётлы донорҙары билдәләнде. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, күп тапҡыр ҡан биргән өсөн 27 кешегә күкрәккә тағыла торған билдә һәм танытма тапшырылды. Башҡортостанда 12 меңгә яҡын кеше "Рәсәйҙең почётлы доноры" исеменә эйә. Уларҙың һәр береһе - 40 тапҡырҙан ашыу ҡан, 60 тапҡыр плазма биргән. Башҡортостанда йыл һайын 500-ҙән ашыу донорға "Рәсәйҙең почётлы доноры" федераль наградаһы тапшырыла.

✓Башҡортостан спортсылары республика тарихында тәүге тапҡыр велокросс буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында миҙалдар яуланы, тип хәбәр иттеләр Республикаға идара итеү үҙәгенән "Сәләм" тапшырыуы эфирында Башҡортостандың спорт министрлығына һылтанма менән. Краснодар крайында уҙған ярышта Юлия Гулина - көмөш, ә Карина Әхмәтханова бронза миҙалға лайыҡ булды. Велосипедсы ҡыҙҙарҙы ярышҡа велоспорт буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе тренеры Зөфәр Исҡәндәров әҙерләгән.

✓Башҡортостан спортсыһы Әмир Фәхретдинов ошо көндәрҙә Орелда уҙған рапирала фехтование буйынса Рәсәй беренселегендә көмөш призёр булды. Өфө рапирасыһының сираттағы еңеүе хаҡында республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Бынан алда Орел ҡалаһында үсмерҙәр араһында рапирала фехтование буйынса Рәсәй кадет беренселегендә Әмир Фәхретдинов еңеүсе исемен яуланы, тип хәбәр иткәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Һәйкәл авторы Салауат Щербаков, оҙаҡ йылдар буйына Мәскәүҙә йәшәһә лә, үҙенең башҡорт улы, башҡорт рухлы булыуының ижадына ыңғай йоғонто яһауын билдәләне.*



КӨН ТЕМАҺЫ

# МОРТАЗА РӘХИМОВ ҺАЛҒАН ҺӘЙКӘЛ

**(Башы 1-се биттә).**

Әммә хәҙерге заман ҡанундарына ярашлы, арҙаҡлы ил улдарының һәм ҡатын-ҡыҙҙарының исемдәрен мәңгеләштереү йәһәтенән, уларҙың матур образдары сәнғәт аша ла матдиләштерелә. 2023 йылдың 7 февраль көнөндә баш ҡалабыҙҙың Ленин исемендәге паркында Рәсәйҙең халыҡ рәссамы, скульптор Салауат Щербаков ижад иткән Мортаза Рәхимов һәйкәлен асыу тантанаһы булды. Беренсе Президентыбыҙҙың арҡадаштары, сәйәсмәндәр, республика етәкселәре, интеллигенция вәкилдәре, ябай Өфө кешеләре Мортаза Рәхимов үҙе тере сағында йыш ҡына үтеп йөрөгән паркта йыйылды. Ағастар өҫтөнән юғарыға артылған ҡурай моңдары әллә ни күптән булмаған хәл-ваҡиғаларҙы, ошо ғәмле һәм фәһемле йылдарҙы һәр кемдең иҫенә төшөрҙө.

Тантаналы сарала хөрмәтле ҡунаҡтар - Рәсәй Федерацияһы Президенты хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Магомедсәләм Магомедов, Татарстан Рәйесе Рөстәм Миңнеханов ҡатнашты. Тантананы республика Башлығы Радий Хәбиров асты. Ул үҙенең сығышында Мортаза Ғөбәҙулла улының хәҙерге заман сәйәсмәндәре һәм етәкселәре өсөн өлгө булып тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды, уның тормош юлдашы Луиза Ғәлим ҡыҙына рәхмәт белдерҙе. Үҙҙәренең сығыштарында Магомедсәләм Магомедов һәм Рөстәм Миңнеханов М.Ғ. Рәхимовтың илебеҙ өсөн үтә ҡатмарлы булған йылдарҙа Рәсәй кимәлендә абруй яулаған етәксе кимәленә күтәрелеүе, Башҡортостанда иҡтисади-ижтимағи үҫеш мөмкинлектәрен булдырыуы, халыҡтарыбыҙ өсөн үтә мөһим булған милләт-ара татыулыҡты нығытыуы хаҡында һоҡланып иҫкә алды, республикабыҙ халҡына киләсәктә лә именаман тормош теләне.

Һәйкәл авторы Салауат Щербаков, оҙаҡ йылдар буйына Мәскәүҙә йәшәһә лә, үҙенең башҡорт улы, башҡорт рухлы булыуының ижадына ыңғай йоғонто яһауын билдәләне. Уның Мортаза Рәхимовҡа ҡуйылған һәйкәле лә халыҡсанлығы менән айырылып тора. 3 метрҙан ашыу бронза һәйкәлдә республика етәксеһе үҙ юлынан барған, ҡуйған маҡсаттарына һис шикһеҙ өлгәшерлек ихтыяр көсө күҙгә бәрелеп торған ир-уҙаман итеп һынландырылған. Бойҙай көлтәһе, ауылдан ҡалаға илтеүсе юл - уның тормош юлының символик сағылышы. Арттараҡ - Мансур граниты блоктарынан яһалған монументаль стелаға нефть сәнәғәтен, төҙөлөштө һәм ауыл хужалығын сағылдырған рельефтар беркетелгән. Стеланың өҫкө өлөшөндә Башҡортостан гербы. Шулай уҡ монументаль пилондың бер яғында республика флагы фонында Башҡортостан картаһы һүрәтләнһә, икенсе яғында - БР Конституцияһының 1-се статьяһы тексы килтерелгән.

Һәйкәл янына килгән саҡта А.С. Пушкиндың әлеге шиғырының тағы ла бер юлы иҫкә төшә: "Уға илткән халыҡ һуҡмағын үлән баҫмаҫ". Эйе, замандаштарыбыҙ Салауат Юлаев һәм Миңлеғәли Шайморатов һәйкәлдәре янына нисек ашҡынып бара, үҙе хөрмәтләгән ил ағаһы һәйкәле эргәһенә лә юл-һуҡмаҡтарын өҙөлдөрмәҫ, тибеҙ.

Шулай уҡ был көндө Өфөлә Энгельс һәм Беренсе Май урамдарындағы Мортаза Рәхимов йәшәгән йорттарға таҡтаташтар ҡуйылды.




**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостандың Милли музейында Мортаза Рәхимовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған "Башҡортостандың Беренсе Президенты" тигән күргәҙмә асылды.**

Шартлы рәүештә бер нисә этапҡа бүлеп һүрәтләнгән экспозиция легендар сәйәсмәндең тормош юлын күҙаллау мөмкинлеге бирә. Башҡортостандың Милли музейы фондында һаҡланған экспонаттар, республиканың милли архивы тарафынан цифрланған һәм музейға тапшырылған документаль сығанаҡтар Мортаза Рәхимовтың республика менән идара итеү осорона алып ҡайта. Шулай уҡ күргәҙмәлә уның "Урал" хәйриә фондындағы эш кабинеты ла тергеҙелгән, бының өсөн мебель, интерьер элементтары, китап, сувенир һәм М. Рәхимовтың шәхси әйберҙәре кеүек йөҙҙән ашыу экспонат ҡулланылған.

Күргәҙмәнең мәғлүмәти өлөшө 1990-2010 йылдарҙағы төбәктең иҡтисади үҫеше хаҡындағы рәсми сығанаҡтар, документаль хроника, видеотапшырыуҙар менән күрһәтелгән. Экспозиция киңлеген Мортаза Рәхимовтың ҡанатлы һүҙҙәре, уның менән интервьюларҙан өҙөктәр, фотоһүрәттәр, замандаштарының һәм хеҙмәттәштәренең иҫтәлектәре тулыландыра. Бында шулай уҡ республиканың төрлө өлкә эшмәкәрлегенә ҡағылышлы материалдар, агитация плакаттары, листовкалар, һайлау бюллетендары, төрлө йылдарҙағы һайлау кампаниялары кандидаттарының декларациялары, Мортаза Рәхимовты эш сәфәрҙәрендә оҙата йөрөгән фотографтар Р.Килмәмәтов һәм Р.Баҙыҡов авторлығындағы уникаль фоторәсемдәр урынлаштырылған.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## БАЙТУРИНА ВАЗИФА ХӘМИТ ҠЫҘЫ

Вазифа Байтурина - комсомол, партия, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре.

Ул 1939 йылдың 25 ғинуарында Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Ольховка ауылында тыуған. Күп балалы ғаиләлә Вазифа иң кесеһе - алтынсы бала булып донъяға килә. Әсәһе ауылда абруйлы кешеләрҙән һанала, ауыл Советына депутат булып һайлана. Вазифа беренсе класта уҡый башлаған йылда алтын сығарыу эшендә старатель булып эшләгән атаһы вафат булып ҡала. Рудник ҡасабаһының Ольховка ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, Баймаҡта урта белем ала. Мәктәптә алдынғы уҡыусыларҙан һаналған тырыш ҡыҙ 1957-1962 йылдарҙа Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетында белем ала.

1962-1965 йылдарҙа БАССР-ҙың Баймаҡ районы Йылайыр урта мәктәп-интернатында урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Әүҙем һәм инициативалы йәш белгесте Йылайыр совхозының комсомол ойошмаһы секретары урынбаҫары итеп һайлайҙар.1965 йылда ВЛКСМ-дың Баймаҡ райкомы секретары вазифаһына тәҡдим ителә. 1965-1966 йылдарҙа ВЛКСМ Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Үҙәк комсомол мәктәбе тыңлаусыһы була.

1966 йылда ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетының студент, мәктәп йәштәре һәм пионерҙар бүлеге мөдире урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Свердловск партия мәктәбен тамамлағас, 1971-1976 йылдарҙа ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитеты секретары вазифаһын башҡара.

Артабан партия органдарында эшләй: 1976-1977 йылдарҙа - КПСС-тың Өфө ҡала комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире, 1977-1982 йылдарҙа - КПСС-тың Өфө ҡала комитеты секретары. 1982 йылда Вазифа Хәмит ҡыҙы бик яуаплы дәүләт вазифаһына тәғәйенләнә - ул 1990 йылға тиклем БАССР Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары булып эшләй. Хөкүмәттә мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм ижтимағи мәсьәләләр секторы кураторы булараҡ, республикабыҙҙың ижтимағи-иҡтисади үҫешенә ҙур өлөш индерә. 1980-1990 йылдарҙа - БАССР-ҙың X һәм XI саҡырылыш Юғары Советы депутаты. 1990-1997 йылдарҙа - Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай секретариатында ойоштороу бүлеге мөдире урынбаҫары. 1977 йылдан алып 1985 йылға тиклем "Белем" йәмғиәтенең Башҡортостан республика ойошмаһы идараһы президиумы ағзаһы.

Ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1981, 1986) һәм Почёт Билдәһе (1976) ордендары кавалеры.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Әфлисун

Йылы яҡта йыл әйләнәһенә емеш биреп ултырған ағас. Унда кеше организмына ыңғай тәьҫир итә торған биологик әүҙем матдәләр бик күп. Әфлисун аскорбин кислотаһына, органик кислоталарға, пектин матдәләренә һәм эфир майҙарына бай. Ул күп төрлө витаминлы, аппетитты асыусы, һыуһынды ҡандырыусы, елһенеүҙәргә ҡаршы сифаттарға эйә. Әфлисун һуты аш һеңдереүҙе яҡшырта, әммә ашҡаҙандың сей яра ауырыуы һәм юғары әселектә гастрит булғанда ярамай.

❖ 1 стакан әфлисун һутын 3 сәғәт һайын эсергә. Һут биҙгәк тотҡанда һыуһынды яҡшы ҡандыра.

❖ Әфлисундың йыуылған ҡабығын ваҡлап, 1:10 нисбәтендә 70 процентлы спирт ҡойорға. Бүлмә температураһында ҡараңғы урында 2 аҙна төнәтергә. Һөҙөп алырға һәм биҙгәктән көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Күрем күп килгәндә, йәки аналыҡтан ҡан килгән осраҡта йыуылған әфлисун ҡабығын ваҡлап, шуның 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 5 минут ҡайнатырға, шунан уты һүндереп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр сирек стакан эсергә.

❖ Ашағы килмәһә, эс ҡатһа, ас ҡарынға әфлисун ашарға йәки һутын һығып эсергә.

❖ Кипкән тиренең торошон яҡшыртыу өсөн әфлисунды йыуып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға һәм ауыҙы ябыҡ һауытта һыуынғансы тоторға. Шунан һөҙөп алырға һәм шул һыуҙы биткә тоник итеп ҡулланырға. Шулай уҡ бешеп етмәгән әфлисун емештәрен түнәрәкләп ҡырҡып, биткә һәм муйынға һалып, 15-20 минут тотоу файҙалы. Бындай битлек тирегә яҡшы тәьҫир итә, арығанлыҡты бөтөрә.

### Аяҡ тырнағында бәшмәк

❖ 100 грам һөтлөгәнгә (молочай) 3 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябырға һәм 30 минут төнәтеп һөҙөргә. Аяҡтарҙы ошо төнәтмәгә 20 минут тығып ултырырға. Был рәүешле тулыһынса һауыҡҡанға тиклем көн һайын дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***Милләттәштәремдең эшһөйәрлеген, әҙәплелеген, уларҙың һәр эшкә намыҫлы ҡарашын күреп һөйөнә инем. Шулай уҡ башҡа милләт кешеләренең башҡорттарға ихтирамлы мөнәсәбәтен дә тойҙом.***

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ала сумғыс өйрәк**
**(Хохлатая чернеть)**



Яҙын ала сумғыс өйрәктең атаһы аҡлы-ҡаралы: өҫкө яғының ҡаралығында ап-аҡ ҡабырғалары яҡшы күренеп тора. Башында ҡаурыйҙары бар. Башы, муйыны, түше ялтырап торған ҡара төҫтә. Суҡышы, тәпәйҙәре һорғолт, күҙҙәре һары. Инә ҡоштоң ҡорһағы аҡһыл-күкһел, күҙҙәре зәңгәр. Ҡанаты ҡаралы-аҡлы. Ата ҡоштоң тауышы баҙыҡ, инә ҡоштоҡо - сағыу.

Йылға буйҙарында, ҙур күлдәрҙең ҡамышында оя ҡора. Өфө губернаһында XIX быуатта ғәҙәти ҡош иҫәпләнә. Хәҙерге мәлдә һирәгерәк осрай. Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ райондары күлдәрендә оя ҡороуы билдәле. Саҡмағош районының Сарлаҡ күлендә лә күренеп ҡала.

Апрель башында, майҙың 15-тәренә тиклем осоп килә. Урал аръяғында 300-400 баштан торған туптарҙы осратырға мөмкин.

Аҡсарлаҡ, унын ваҡ төрө сарлаҡ менән бер колонияла оя ҡороуы бар. Ҡамыш, екән һәм башҡа һыу өҫтө үҫемлектәрен үҙ итә. Ояһына күп итеп ҡауырһын түшәй. Учалы районы Ҡарағайлы күлендә бер ояла 22 йомортҡа һалынғанын күрҙек, уларҙы бер нисә инә ҡош һалған булырға тейеш. Йомортҡа күп булһа, баҫҡан саҡта уларҙың ситтә ятҡандарына йылы етмәй, һөҙөмтәлә улар әрәм була. 7-12 бәпкә сыға, уртаса һәр инә ҡош 8 бәпкә баҫып сығара. Ошо ҡоштарҙың яртыһы төрлө сәбәптәр арҡаһында һәләк була.

Үҫемлек менән дә, моллюскылар, ҡуңыҙҙар, һөләктәр, ҡырын йөҙөүсе бөрсә менән дә туҡлана. Башлыса күрән, ҡамыш, ылымыҡтар ашай. Ҡарағайлы күлендә йәшәгән ала сумғыстар эңерҙә 500 м арауыҡта ятҡан Оло Учалы күленә осоп киттеләр ҙә, таңға тиклем шунда туйындылар.

Көҙөн йылы яҡҡа китеү ваҡыты сентябрь урталарында башланып, октябрь-ноябрь башына тиклем дауам итә. Ағиҙел йылғаһы буйында 40-50 ҡоштоң бергә тупланып, осорға әҙерләнеүен күрергә тура килде.

Ҡышлау өсөн Каспий, Ҡара, Урта диңгеҙ буйҙарына, шулай уҡ артабан көнбайышҡараҡ - Атлантикаға, көньяҡҡа - Төньяҡ Африка һәм Кесе Азияға тиклем осоп етә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ*

# БАЛА ӨСӨН...

## башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәре мөһим



**Халҡыбыҙҙың телдән-телгә күсеп килгән бик боронғо "Урал" йырын мин бала сағымдан ишетеп үҫтем. Атайым Төхфәтулла Шаһишәриф улы (мәрхүм) был йырҙы әҫәрләнеп, моңло итеп йырлай торғайны. Йәйҙең йәмле көндәрендә бесәнгә китеп, йә ҡырҙан ҡайтып барышлай, тирә-яҡты яңғыратып, көслө, матур тауыш менән һуҙып ебәрә: "Күгәреп тә ятҡан Урал тауы - атай-олатайҙарҙың төйәге. Илен-ерен һаҡлап ҡорбан булған, шунда ята батырҙар һөйәге..."**

"Урал" йырын тигенгә генә иҫкә алманым: һәр кемгә тыуған төйәге ҡәҙерле, ә һәр ҡәҙерле нәмә мотлаҡ һаҡлаулы булырға тейеш. Беҙгә сит ерҙең бер генә киҫәге лә кәрәкмәй, әммә гүзәлдәрҙән гүзәл ошо илебеҙгә яттар һонолмаһын өсөн ир-егеттәребеҙ һәр саҡ уяу, һәр йәһәттән һәләтле, белдекле булырға тейеш.

Эйе, тыуып үҫкән ере хаҡында уйланмаған кеше бармы икән был донъяла? Ер йөҙөндә йәшәгән һәр ҡәүемдең тыуған иле, дине, һөйләшкән теле, үҙенә генә хас булған тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре бар, һәр кемгә ана шул ҡиммәттәре яҡындыр. Ситтәр килеп иленә ҡул һуҙһа, һәр халыҡтың ғәзиз ерен яҡлауға күтәрелеүе - тәбиғи. Оло кешеләр яҡшы хәтерләй: СССР дәүерендә бар милләт вәкиле үҙен "совет кешеһе" тип һананы. 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, күп милләтле халҡыбыҙ дәррәү ҡалҡып, бөтә Европаны һис ҡаршылыҡһыҙ баҫып алып килгән немец фашистарының "еңелмәҫ" армадаһын ҡыйратты. Шул яуҙа Башҡортостаныбыҙҙың да иң алдынғы сафта булыуы беҙҙә һәр саҡ ғорурлыҡ тойғоһо уята ине. Борон-борондан Рәсәй именлеген дошмандарҙан һаҡлауҙа танылған беҙҙең ата-бабаларыбыҙ. Яугир халыҡ булып даны сыҡҡан башҡорттарға айырым кавалерия дивизияһы төҙөү буйынса юғары командованиеның бойороғо сығыуы ла тигенгә түгелдер. Шундай айырым милли ғәскәр башҡа тағы ла ниндәйҙер төбәктә ойошторолоуы хаҡында ишеткәнем юҡ. Һикһәнгә яҡын Советтар Союзы геройы биргән был данлыҡлы хәрби часть, унын тәүге командиры - ҡаһарман генерал Миңлеғәле Шаймуратов хаҡында бөтә Рәсәй белә (был юғары исемгә бөтә Башҡортостандан 300-гә яҡын кеше лайыҡ була)...

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, күп тә тормай, Корея, һикһәненсе йылдарҙа - Афған, унан беренсе, икенсе Кавказ ваҡиғалары ир-егеттәребеҙҙе һәр саҡ "быуындарҙы ҡаты тоторға" көйләп килде. Ҡоралдары фәҡәт беҙҙең илебеҙгә ҡаршы тоҫҡалған НАТО дәүләттәре менән һуғыш-маҙар сыға ҡалһа, халҡыбыҙҙың һәр саҡ тышҡы дошмандарға ҡаршы сығырға әҙер тороу зарурлығы, "дарыны ҡоро көйөнсә тотоу" кәрәклеге тураһында йыш ҡына һүҙ алып барыла. Әле булһа донъялар төрлөсә үҙгәреп, унда-бында "ҡыҙыу нөктәләр" барлыҡҡа килеп тора.

Ошо хаҡта уйлана башлау менән үҙебеҙҙең ҡасандыр яратҡан ана шул Советтар Союзы дәүере тағы һәм тағы күҙ алдына килә. Ул осорҙар мәктәп балаларында илһөйәрлек рухы тәрбиәләү иң беренсе планда тора ине. СССР Конституцияһында "Ватанды һаҡлау - һәр Совет гражданинының почетлы бурысы!" тигән статьяһы булды. Хәрби әҙерлек мәктәбе (Начальная военная подготовка) тип аталған дәрескә ныҡ ҡына баҫым яһалды. Һуңғы осорҙар ана шул предметҡа ҡараш һүлпәнәйеүе, күпмелер ваҡытҡа унын иғтибарһыҙ ҡалыуы хаҡында ишеткеләй башлағас, әлбиттә, бер аҙ борсола инем, әммә бөгөн был дәрестәрҙең ҡабаттан "терелеүе" тураһында ишетеп, кәйефләндем, йәш сағыма әйләнеп ҡайтҡандай булдым. Үҙем, сирек быуат дауамында "мундир" кейеп йөрөүемә ҡарамаҫтан, хәрби кейем һис кенә лә ялҡытмаған. Бала сағымдан һалдат булырға хыялланып үҫкән малай булараҡ, бөгөнгө мәктәптәрҙә кадет кластары асылыуына шатмын. Ундағы ялтлап торған ҡыҙыл, күк погонлы хәрби кителдәге йә башҡорт "кәзәкейе" стилендә тегелгән костюмдағы малайҙарҙы күреп, оло ҡәнәғәтлек кисерәм, сираттағы мәртәбә бала саҡ хәтирәләренә төшөп китәм.

Эйе, илһөйәрлек тойғоһо, хәрби хеҙмәткә ыңғай ҡараш, әлбиттә, малай сағыбыҙҙан уҡ күңелебеҙгә һалынырға тейеш. Беҙҙең Баймаҡ интернат-мәктәбендә был дәрескә ныҡ ҡына иғтибар бирелде. Ҡыҙҙарҙы белмәйем, әммә малай халҡы өсөн был, моғайын, иң ҡыҙыҡлы предмет булғандыр. Запастағы өлкән сержант Ҡунаҡбаев Рәүил, кесе лейтенант Ҡашҡаров Ғәзизйән ағайҙарҙың (улар хәҙер мәрхүмдәр инде) үткәргән дәрестәре бөгөнгөләй күҙ алдымда. Үҙҙәренең хеҙмәт иткән мәлдәрендә кисергән мажараларҙы, төрлө хәлдәрҙе миҫал итеп килтереп һөйләгәндәрен йотлоғоп тыңлай инек. Хәрби устав ҡағиҙәләрен күңел биреп өйрәндек, автомат тиреп, уны таҙартып майлау, ҡабаттан йыйыу ҙа беҙҙең өсөн ифрат ҡыҙыҡ шөғөл булды. Ә инде дәрестән һуң бәләкәй калибрлы винтовканан - ысын мылтыҡтан атыу өсөн ҡырға сығырға ашҡынабыҙ. Ҡайһы бер шуҡ малайҙар, ҡыҙығыраҡ булһын өсөн, һорауын ике мәғәнәлерәк итеп төҙөп: "Рауил ағай, беҙҙе атырға алып бараһығыҙмы?" - тип, өлкән сержантты көлдөрөп ала. Ҡаланан өс-дүрт саҡрым ситтәрәк ятҡан Таналыҡ буйына киләбеҙ. (Кеше йә хайуан-маҙарға хәүеф тыуҙырмаҫ өсөн, атыш майҙаны бар тирә-яҡҡа асыҡ күренеп торорға тейешле. Шуға күрә, был занятиеларҙы ҡыш үткәрә инеләр. Әлеге винтовканың пуляһы бер километрҙан алыҫыраҡҡа оса...) Сәпкә тырыша-тырыша атып, ярайһы ғына очколар йыйып ҡайтабыҙ. Ә йәй башланғас та бөтә район мәктәптәренән туғыҙынсы синыфты тамамлаған малайҙарҙы Ирәндек итәгенә хәрби лагерға йыялар. Пинжәктәргә погондар, еңдәргә "юнармеец" шевроны таҡҡан үҫмерҙәрҙән торған ҙур ғына (бер полк самаһы булыр) "ғәскәр" барлыҡҡа килә. Беҙҙең етәкселәребеҙ - әлеге военрук ағайҙар подразделение командирҙары булып китә. Палаткалар ҡороп, ысын "әрме" уйыны уйнайбыҙ. Был уйында ҡыҙҙар ҡатнашмай. Кросс йүгереп, противогаз кейгән килеш ҡаршылыҡтар һыҙатынан үтеп, үҙебеҙҙе һынайбыҙ. Иң ҡыҙығы - ысын автоматтан атыу. Атыу дәресенең етәксеһе - хәрби комиссар, уҫал йөҙлө подполковник ағай... Хәрби әҙерлек буйынса зачет биреүе үҙе бер мауыҡтырғыс шөғөл. "Сторевой йыр" буйынса һынауҙы ла уңышлы тапшырабыҙ: "Ой красивы над Волгой закаты... Ты меня провожала в солдаты. Руку жала, провожала, провожала, провожала..."

Көнөнә өс мәртәбә ашатырға ла онотмайҙар, әлбиттә. Занятиеларҙа арып, ярайһы ғына асыҡҡан малайҙарға баҫыу кухняһында бешерелгән һалдат бутҡаһы ғәйәт тәмле тойола, хатта "теленде йоторлоҡ" тип тә әйтергә булалыр. Ул саҡта Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары ла әле байтаҡ ҡына, күптәре дүртенсе тиҫтәһен генә аша атлаған кешеләр ине. Шуларҙың береһен осрашыуға саҡырып, улар һөйләгән фронт хәтирәләрен тыңлайбыҙ. Ҡыҙыҡһынған һорауҙарыбыҙҙы бирәбеҙ. Кисен кинофильм күрһәтәләр. Бер аҙна дауамында шулай "нужа ҡаласын" татығандан һуң, әллә кем булып, өйҙәргә ҡайтып китәбеҙ. Бына шундай замандарҙы иҫләп алдым әле.

Ғәҙәтемсә, егеттәребеҙҙең бик яҡшы бер сифатын сираттағы мәртәбә телгә алып китмәй булмай. Үҙемдең оҙайлы әрме хеҙмәтем дәүерендә милләттәштәремдең эшһөйәрлеген, әҙәплелеген, уларҙың һәр эшкә намыҫлы ҡарашын күреп һөйөнә инем. Шулай уҡ башҡа милләт кешеләренең башҡорттарға ихтирамлы мөнәсәбәтен дә тойҙом. Командирҙарҙың йыш ҡына "Һеҙҙең егеттәр - ышаныслылар" тип, һалдаттарыбыҙҙы маҡтағандары иҫемдә. Борондан килгән шундай яҡшы традицияны егеттәребеҙ әле лә дауам итәлер тигән ышаныстамын. Иң башта "Урал" йырын тигенгә генә иҫкә алманым: һәр кемгә тыуған төйәге ҡәҙерле, ә һәр ҡәҙерле нәмә мотлаҡ һаҡлаулы булырға тейеш. Беҙгә сит ерҙең бер генә киҫәге лә кәрәкмәй, әммә гүзәлдәрҙән гүзәл ошо илебеҙгә яттар һонолмаһын өсөн ир-егеттәребеҙ һәр саҡ уяу, һәр йәһәттән һәләтле, белдекле булырға тейеш.

Һүҙ аҙағында. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яҡташтарыбыҙҙың яу ҡырында һәләк булыуы хаҡында әленән-әле ишетеү, әлбиттә, барыбыҙға ла ауыр. Яҡынын юғалтып, оло ҡайғыға тарыған ата-әсәгә, кәләштәргә, бала-сағаларға Раббыбыҙ сабырлыҡ бирһен. Илһөйәр, ғәйәт батыр егеттәребеҙҙең киләсәктә тик тыныс шарттарҙа ғына хәрби бурысын үтәп, өйҙәренә һау-сәләмәт ҡайтыуҙарын, уларҙың татыу ғаиләле булып, бала-сағалар үҫтереп, бәхетле ғүмер итеүҙәрен күрге, ишетке килә. Ҡасан да булһа бына шундай матур ваҡыттар ҙа тыуыуына өмөтөбөҙҙө өҙмәйек.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны,**
**отставкалағы подполковник.**

✓ *Кушнаренко керамикаһының Урал буйы һәм Урал арьяғы варианттары, һауыт-һаба һәм орнаментация формаһында үçешә барып, төрки телле ҡәүемдәрҙең, шул иçәптән башҡорттарҙың мәҙәниәте менән туранан-тура бәйле була.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киçәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



**V-VIII быуаттарҙа Көнсығыш Урал арьяғы ҡәбиләләре**

Тикшеренеүселәр бакал мәҙәниәтенең иртә тимер быуатының урындағы саргат мәҙәниәте нигеҙендә формалашыуы хаҡындағы берҙәм фекер яҡлы, һәм ошо мәғәнәлә ул урындағы ултыраҡ халыҡҡа ҡарай. Ауыҙы буйлап горизонталь рәүештә һыҙылған дүңгәләктәр, шыршы, селтәр, соҡорсоҡ уйымдар менән биҙәлгән тәбәнәк түңәрәк төплө һауыттарҙан хасил булған керамика ошо мәҙәниәттең мөһим этник күрһәткесе булып тора. Күп һауыттарҙың формаһы (айырылып торған ҡыçҡа муйындары), һәм бигерәк тә орнамент элементтарын урынлаштырыу характеры бер ни тиклем Көнбайыш Урал буйының кушнаренко һәм ҡара яҡуп тибындағы һауыттарын хәтерләтә, әммә, дөйөм алғанда, бакал керамикаһының төп составының уларҙан етди айырымлығы бар, һәм уларҙы үҙаллы мәҙәни комплекс итеп ҡарау урынлыраҡ. Бакал ҡомарҡтыларында сағыу бай орнаментлы кушнаренко һауыттарының һирәк осрай торған экземплярҙары табылған. Айырым алғанда, улар Ҙур Бакал ҡалаçығы ҡомарҡтыһында, Усть-Тарск-7 ҡәберлегендә һәм башҡа бер тораҡтарҙа табылған.

Көньяҡ Уралдағы һәм Көнбайыш Себерҙәге кушнаренко керамикаһының килеп сығышы мәсьәләһе әҙәбиәттә әлегә дискуссияла характерҙа ҡала. Күп кенә археологтар кушнаренко керамик һауыт-һабаһының иң элгәре Көнбайыш Себерҙә хасил булып, артабан унан Көнбайыш Урал буйына таралып киткән, тигән фекер яҡлы. Был фараз Д. Н. Маслюженконың 2008 йылда баçылып сыҡҡан мәҡәләһендә сағылыш тапҡан. Унда автор ошо проблема буйынса үҙенән алдараҡ эшләгән тикшеренеүселәрҙең тезистарын ҡабатлай: Көнбайыш Себерҙең һуң саргат ҡәбиләләре б.э. IV быуаттары тирәһендә Көнбайыш Урал буйына күсеп китеп, бында кушнаренко керамикаһын яһау традицияһын индергән. Ошо фаразға ярашлы, кушнаренко керамикаһының барлыҡҡа килеүен саргат мәҙәниәте менән бәйләү өсөн ерлек булмауын һыҙыҡ өçтөнә алырға кәрәк.

Үҙебеҙҙең иртәрәк яҙылған мәҡәләләребеҙҙә кушнаренко тибындағы һауыттарҙың Көнбайыш Себерҙә VI-VII быуаттарҙан да алдараҡ булмауы, йәғни Көнбайыш Урал буйындағы кушнаренко һауыттары менән бер үк ваҡытта тарала башлауы хаҡында бер генә тапҡыр белдермәгәйнек. Быны ошо ике районға ҡараған керамиканың килеп сығышы яғынан киң мәғәнәлә алынған Дала Евразияһы күскенселәре мәҙәниәтенә барып тоташыуы менән аңлатып була. Беҙҙең ҡарашҡа, киләсәктә ошо юçыҡтағы тикшеренеүҙәрҙә түбәндәге фаразға иғтибар итеү кәрәктер: ҡатмарлы орнаментлы, йоҡа стеналы һәм нәфис кушнаренко һауыт-һабаһы, моғайын, металл һауыт-һабаға оҡшатып эшләнгәндер һәм ритуаль әһәмиәткә эйә булғандыр. Шулай уҡ б.э. II-III быуаттарында Көньяҡ Урал ҡурғандарында формаһы һәм орнаментының үҙенсәлеге буйынса кушнаренко керамикаһының боронғо прототибы итеп ҡарарлыҡ балсыҡ һауыт-һаба өлгөләре табылыуы хаҡында әйтеп үтмәй булмай.

Кушнаренко керамикаһын тыуҙырыусыларҙың сығышын уйлап сығарып ҡына Көнбайыш Себер менән бәйләп аңлатыусыларҙы бер уртаҡ идея берләштереүе уҡыусыбыҙға ҡыҙыҡлы булыр, тибеҙ: улар боронғо уғырҙарҙың - венгр халҡының алыç, әммә туранан-тура ата-бабаларының археологик эҙҙәрен табырға ниәт итә. Хәҙерге венгр теле Көнбайыш Себерҙең тайга төбәгендә йәшәүсе ханттар һәм мансиҙарҙың теленә бик яҡын һәм улар бергә фин-уғыр тел системаһының уғыр төркөмөн хасил итә. Әгәр ҙә кушнаренко ҡәбиләләренең Көнбайыш Себерҙең урман зонаһынан булыуы иçбатланһа, улар уйлаған-са, фән венгр халҡы этногенезының ҡатмарлы проблемаһын хәл итеүгә яҡынлашыр ине. Ә әлегә был мәсьәләлә түбәндәге фекер бәхәсһеҙ булып ҡала. Кушнаренко керамикаһының Урал буйы һәм Урал арьяғы варианттары, һауыт-һаба һәм орнаментация формаһында үçешә барып, X-XV быуаттарға тиклем ҡулланыла килеп, Дала Евразияһының дала һәм урманлы дала зоналарында йәшәгән төрки телле ҡәүемдәрҙең, шул иçәптән башҡорттарҙың мәҙәниәте менән туранан-тура бәйле була. Кушнаренко керамикаһын тыуҙырыусыларҙың мадъярҙар менән ниндәйҙер бәйләнештәре булыуы-булмауы хаҡында түбәндәрәк бәйән ителәр.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыçлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

Люблин ҡалаһын азат иткәндән һуң фронт командующийы 7-се гвардия корпусына 2-се танк армияһы составында Бабин - Стешковице - Праведники рубежында оборона тоторға һәм Хмель районы яғынан Люблинды көньяҡтан ҡаплап торорға бойора. Беҙҙең 16-сы гвардия атлы дивизияһы оборона позицияларында дошмандың һөжүмен кире ҡағып, 25 июлдә уның 25-се һәм 253-сө пехота дивизияларын, 991-се айырым батальонын ҙур юғалтыуҙарға дусар итә, байтаҡ ҡына һалдаттарын әсиргә ала. 28 июлдә фронт командующийы, 7-се гвардия корпусын 2-се танк армияһына буйһоноуҙан сығарып, фронт резервы составында ҡалдыра. Корпус Любартув, Каменка районында туплана.

19 июлдән 28 июлгә тиклем барған алыштарҙа 7-се гвардия корпусы яугирҙары немецтарҙың 6 меңдән ашыу һалдатын һәм офицерын юҡ итә , 3,5 мең кешеһен әсиргә ала. Дошмандың 30 танкыһы, 17 бронемашинаһы, 20 үҙйөрөшлө орудиеһы, 11 самолеты, 22 орудиеһы, 232 автомашинаһы юҡ ителә, 15 батареяһының уты баçтырыла. Төрлө йөктәр тейәлгән 11 эшелон, 78 орудие, 113 пулемет, хәрби мөлкәт тулы 10 келәт ҡулға төшөрөлә. Хелм һәм Люблин ҡалалары өсөн барған алыштарҙа командование ҡуйған бурыстарҙы өлгөлө үтәгәне өсөн 7-се гвардия корпусы Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә, ике тапҡыр Юғары Баш командующийҙың бойороҡтарында маҡтауға лайыҡ була. 14-се һәм 15-се гвардия атлы дивизиялары шулай уҡ Ҡыҙыл Байраҡ, ә 16-сы гвардия атлы дивизияһы - II дәрәжә Суворов ордендары менән билдәләнә.

16-сы гвардия атлы дивизияһына беркетелгән 32-се танк полкы Люблин ҡалаһының тимер юлы станцияһы өсөн барған бәрелештә айырыуса оло ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтә. Тимер юл станцияһына табан барған юл буйында дошмандың үҙйөрөшлө орудиелары совет танкыларын көслө ут менән ҡаршылай, ике арала тиңһеҙ алыш башлана. Дошман беҙҙең танкыларҙы тимер юл станцияһына нисек итеп булһа ла үткәрмәҫкә тырыша, сөнки был саҡта унда төрлө йөктәр тейәлгән һәм ҡуҙғалырға әҙер торған бер нисә эшелон торған була. Шундай көсөргәнешле, хәл иткес мәлдә полк командиры, подполковник Галкин Владимир Александрович, танкистарын алға әйҙәп, дошман орудиелары позицияһына ҙур тиҙлек менән бәреп инә, немецтарҙың бер орудиеһын тапатып ауҙара, икенсеһенә таран эшләп, өсөнсөһөнә табан йүнәлә. Иçән ҡалған дошман артиллеристары тырым-тырағай ҡасып китеү яғын ҡарай. Үкенескә күрә, ул ошо алыштан аҙаҡ ауырып китә, табиптар уның ғүмерен ҡотҡара алмай. Ҡаһарман командир 1944 йылдың декабрь аҙаҡтарында вафат була, арҡаҙаштары уны Польшаның Люблин ҡалаһында туғандар ҡәберлегендә ерләй. Совет командованиеһы уның иç киткес батырлығына юғары баһа бирә - СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 24 мартындағы Указы менән уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. В.А. Галкин Горький өлкәһендә тыуып үçкән, ул үҙен бик тәжрибәле һәм оçта командир итеп таныта: 1939 йылда Халхин-Гол йылғаһы буйында, ә 1939 - 1940 йылдарҙа совет-фин һуғышында ла ҡатнаша.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**Әл Ҡашғари: "Иш - лампанан һәм төтөндән стеналарҙа һәм башҡа урындарҙа барлыҡҡа килгән һөрөм, ҡором. Тон иш болди - кейем ҡоромға буялды".**

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә ошо мәғәнәләге боронғо "иш" йә иһә "ыш" һүҙҙәре юҡ. Ул һүҙ урынына әлеге ҡором һәм һөрөм һүҙҙәрен ҡулланабыҙ. Ҡором, һөрөм ағас яндырғанда сыҡҡан ҡара төтөндән хасил була. Телебеҙҙә ошондай төтөн менән бәйле тағы бер һүҙ бар - ыç. Ул аңлатмалы һүҙлектә "төтөн ҡараһы, төтөн", тип аңлатыла. Мәçәлән, өй стеналары ыçланып бөткән, тибеҙ. Моғайын, "ыç" һүҙенең этимологияһы ошо боронғо "иш (ыш) һүҙенә барып тоташалыр, тик телебеҙҙең тарихи үçешендә ул "ҡором" мәғәнәһен юғалтып, ниндәйҙер бер әйберҙең төтөн тәçьиренән хасил булған яңы сифатын аңлата башлаған: ыçланған балыҡ, ҡорот ыçлау, тире ыçлау. Йәнә бөгөн бер башҡорт һөйләштәрендә "ыçлау" һүҙе тап ҡоромлау, һөрөмләү тигәнгә тура килә.

**"Ок - уҡ. Ок - өй ҡыйығының асамайы. "Эв окы" - өйҙөң өрлөгө".**

Белебеүеҙсә, уҡ тәү кешеләр таш быуатынан бирле уйлап тапҡан һунар һәм һуғыш ҡоралы. Күрәһегеҙ, был һүҙ боронғо төрки теленән бер аҙ ғына үҙгәрә бирмәй килеш телебеҙҙә һаҡланып ҡалған. Шул уҡ һүҙ өй ҡыйығын төҙөгәндә ҡулланылған бүрәнәне лә аңлатҡан. Телебеҙҙәге өрлөк, асамай (русса - стропило) һүҙҙәре менән бер рәттән, шул уҡ ҡыйыҡ бүрәнәһен аңлатҡан "уҡлас" һәм "уҡ" һүҙҙәре лә ҡулланыла. Шулай уҡ тирмә көмбәҙенә һалына торған нәҙек таяҡ та "уҡ" тип атала.

**"Ок йылан" - кешегә ташланыусы йылан".**

Телебеҙҙә "уҡ йылан" төшөнсәһе әле лә бар, ул йылтыр һары төçтәге үтә ағыулы йыландарҙың береһе, тос йылан, баҡыр йылан (русса - медянка) тип тә атайҙар; сөйләктәрҙә йыш осрай.

**"Ок" - ер участкаларын һәм барса башҡа нәмәләрҙе бүлешер өсөн ҡулланылған йәрәбә".**

Күрәһегеҙ, йәрәбә һалыу, йә иһә шыбаға тотоу - бик боронғо замандарҙан ҡалған иждимағи күренеш; бер ырыуҡәбилә кешеләре йәрәбә ҡулланыу алымын төрлө әйберҙәрҙе бүлешкәндә низағ-бәхәстәрҙе булдырмау маҡсатында ҡулланған. Бәлки, "өләшөнә төшкән көмөшөң" тигән фразеологик һүҙбәйләнеш ошо дәүерҙәрҙән бирле һаҡланып киләлер. Беҙҙең иң боронғо "Урал батыр" эпосында кемгә ҡайһы юлдан китеүҙе Урал менән Шүлгән шыбаға тотоп хәл итергә уйлай: "Карттан былар ишеткәс, Юлдар серене белгәс, Урал, Шүлгән икәүһе Шыбаға тотоп араһы, Юл бүлергә уйлашҡан". Ә ни өсөн боронғолар йәрәбәне "ок" тип атаған һуң? Күрәһен, уҡ сыбығы шыбаға ролен үтәгәндер ҙә инде.

"Ок" һүҙенең тағы ла бер омонимы булған:

**"Ок" - ҡылымдар янындағы көсәйтеү киçәксәһе. Әйтәләр: "Барыл ок - барсы уҡ!"**

Әйтергә кәрәк, телебеҙҙә "уҡ", "үк" киçәксәләре йыш ҡулланыла: "Энер төшкәнсе үк", " "Йырлап уҡ ебәрҙе".

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

✓ *Ошо ике тиҫтә йыл дауамында, бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөгөҙгә алып, федераль үҙәк бер аҙға биреп торған үҙаллылыҡты оҫта файҙалана белдегеҙ. Һөҙөмтәлә ауыл хужалығы тулыһынса тар-мар ителеүҙән ҡотҡарылды.*



**Һаумыһығыҙ әле, Мортаза Ғөбәйҙулла улы! Һаумыһығыҙ, Башҡортостаныбыҙҙың хөрмәтле Бабайы! Бәлки, бәғзе берәүҙәр минең һеҙгә ошолай итеп, фани донъябыҙҙан сикһеҙ йыһан баҡыйлығы арауығы аша мөрәжәғәт итеүемә сәйерһенеберәк ҡарар. Минеңсә, бында әллә ниндәй сер ҙә юҡ кеүек: аҙәм балаларының ерҙәге матди тормошо һүнһә лә, уларҙың үлемһеҙ йәндәре асманға ашып, халыҡ әйткәнсә, әруахҡа әйләнә. Беҙ баҡыйлыҡта ла үҙенсәлекле тормош барлығына ысынлап тороп ышанабыҙ бит...**

# БАШҠОРТОСТАН КҮГЕНЕҢ ЯҠТЫ ЙОНДОҘО,

## йәки Ил ағаһына виртуаль хат

(Эссе).



● Ҡәҙимгесә, һәүетемсә, әммә һеҙһеҙ генә шулай йөшәп ятҡан көнөбөҙ. Халҡыбыҙ һеҙҙе бик тә юҡһынып уҙ һағынып иҫкә ала бөгөн. Һеҙ, әлбиттә, унан тороп та беҙгә ярҙам ҡулын һуҙа алыр инегеҙ, әммә Хоҙайыбыҙ фанилыҡ менән баҡыйлыҡ араһында туранантура бәйләнеште хуп күрмәгән: ерҙәгеләр, тере заттар, үҙ күҙҙәре менән күреүҙәре күрергә, үҙ тормоштарын үҙҙәре көйләргә тейеш. Был инде Аллаһ ҡануны, уны бер кем дә үҙгәртә алмай. Әммә кешемен тигән кеше бер заманда ла уйланмайынса, алдағы йәшәйешенең нисек һәм ниндәйерәк буласағын аҙмыкүпме күҙалламайынса, тыныс йәшәй алмай. Был фани донъяла, әлбиттә, хәл ителмәгән проблемалар күп инде, һәм яңынан-яңылары ла тыуып тора. Бик ышаныслы итеп әйтәм: халҡыбыҙ элеккесә, иртәгәһен ишеҡ ҡайғыртҡан, тип йәшәмәй хәҙер. Ул рухи йоҡоһонан уяна бара, айный, йәшәү рәүеше һәм уның ҡиммәттәре хаҡында йышыраҡ уйлана. Киләсәк быуынға, йәштәребеҙгә лә, ышаныбыҙ ҙур. Киләсәгебеҙҙе изге һәм һоҡландырғыс итә аласаҡ йәш егет-ҡыҙҙарыбыҙ хәтерендә һеҙ ике тиҫтә йыл буйына идара иткән Башҡортостаныбыҙ һәм унын үҙе хаҡында матур иҫтәлектәр ҡалһын, тибеҙ. Шуның өсөн уларға һеҙҙең шәхесегеҙ, бигерәк тә йәш сағығыҙ хаҡында бер ни тиклем мәғлүмәт биреп китмәксе булдыҡ:

● "Мортаза бабайығыҙ Ғөбәйҙулла Рәхимов һәм Ғәлимә Яҡшыбаева ҡорған ҡәҙимге башҡорт ғаиләһендә, Күгәрсен районының Тәүәкән ауылында тыуып үҫкән. Бөйөк Ватан һуғышынан алда колхозлаштырылған ауылдарҙа тормош еңелдәрҙән булмай, әммә башҡорттар тырышып эшләй, йәштәр бер-береһе менән танышa, өйләнешә, ауыл клубтарында концерттар ҡуя, йырлап-бейеп күңел аса. Мортаза ла бала сағынан уҡ ата-әсәһенең ихласлығын, бер-береһенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттәрен, кешеләргә игелекле һәм ярҙамсыл булыуҙарын күреп, күңеленә һеңдереп үҫә. Йәнә ул да, башҡа ауыл малайҙары кеүек, аҙмы-күпме ҡул араһына инә башлағас, йорт-ҡаралты эштәрендә, утын-бесән әҙерләүҙә ата-әсәһенә ярҙам итешә. Ғөмүмән, эшһөйәрлек йәштән уҡ уның иң аҫыл сифаттарының береһе булып төйнәлә.

1941 йылдың 22 июне. "Һуғыш сыҡҡан, немец фашистары илебеҙгә баҫып ингән!" - тигән ҡара хәбәр йәшен тиҙлегендә бөтөн Башҡортостанға тарала. Йәш егеттәр, урта йәштәге ир-ат берәмләп тә, күмәкләп тә фронтҡа китә. 1941 йылдың ноябрендә сират Ғөбәйҙулла Зөфәр улына ла етә. Һуғышҡа китер алдынан ул ғаиләһен бер туған ағаһы йәшәгән Йомағужа ауылына күсерә. Әммә туғандарының өйөндә ике ғаилә һыйырлыҡ урын булмағас, уларға ихатала ер өй әтмәләштереп бирәләр. Мортазаның әсәһе балалары менән һуғыш бөткәнсе шул ер өйҙә йәшәй. 1946 йылдың баштарында лейтенант Ғөбәйҙулла Рәхимов тыуған яҡтарына ҡайтып етә. Атаһы, һуғыштан ҡайтҡас, ғәзиздәренең ниндәй шарттарҙа йәшәүен күреп, илап ебәрә. Күп йылдар үткәс, Мортаза Ғөбәйҙулла улы үтә лә ауыр ваҡытта нисек көн иткәндәре хаҡында былай тип хәтерләй: "Мин һуғыш йылдарында үҫтем, ризыҡ етешмәне, беҙ күберәк ас йөрөнөк. Яҙ етһә, ялан-дарҙа тунған бәрәңге йыйҙыҡ, йәй көндәрен ураҡтан аҙаҡ тороп ҡалған башаҡтарҙы супләнек, уларҙы ҡул тирмәнендә тарттыра торғайныҡ".

Мортаза бик тырыш, өлгөр уҡыусы була, 1952 йылда Теләүембәттә 7 йыллыҡ мәктәпте тик "5" һәм "4" билдәләренә тамамлай. Һәйбәт, илгә файҙа килтерерлек һөнәргә эйә булыу теләге ҙур була уның. Өфө нефть техникумын һайлай ул, атаһы ла быны хуплай. "Ул саҡта геолог, нефтсе булыу модала ине, стипендияһы ла ҙур. Беҙ ғәмәлдә ошо аҡсаға йәшәнек. Уҡырға инеп китеү ҡатмарлы булды: бер урынға 12,5 кеше дәғүә итте", - тип хәтерләй аҙаҡтан арҙаҡлы нефть эшкәртеү оҫтаһы".

Бында мин, Мортаза ағай, йәштәргә һеҙҙең балалыҡ һәм йәшлек йылдарығыҙҙа булған хәл-ваҡиғаларҙын, хис-кисерештәрегеҙҙең мендән бер өлөшөн генә бәйән иткәнмендер. Әммә һеҙҙең оло тормош юлына сыға алыуығыҙ өсөн илебеҙ шарттар булдырған, һеҙ үҙегеҙ ҙә ҡуйған маҡсатығыҙҙан һис бер ситкә тайпылмағанһығыҙ.

● 1956 йыл. Һеҙгә 22 генә йәш. Йәш һәм дәртле йөрәгегеҙ ҙә "Эш-кә, эш-кә!" тип типкәндер ул мәлдә. Һеҙгә ниндәй яуаплы вазифа йөкмәткәндәр Өфө нефть эшкәртеү заводында: установка операторы - ул бит заводтың төп эшсе көсө. Иртәнән кискә тиклем аяҡ өҫтөндә - техник ҡоролмаһың эше талап ителгән регламенттан һис тайпылмаҫҡа тейеш: күҙәтәһең, төҙәтәһең, көйләйһен. Установка көйлө икән, бензин-кәрәсине лә, дизель яғыулығы менән мазуты ла махсус цистерналарға туктауһыҙ ағып торасаҡ, заводтың дәүләт алдындағы пландары ғәмәлгә ашасаҡ. Һеҙ тырышып эшләнегеҙ, башҡалар алдында һис мах бирмәнегеҙ. Уйлана инегеҙ: урта техник белем етерлек түгел бит был һөнәр өсөн, яңылыҡтар, технологиялар камиллаша бара, фән дә етештереү өлкәһе менән бермә-бер бәйле. Артабан ошо өлкәлә белем кимәлен күтәреү зарур, ә бының өсөн уҡыуынды мотлаҡ дауам итергә кәрәк. Бик теләп көндөҙгә бүлеккә инер инең - ғаиләң бар хәҙер, йәшәр өсөн аҡса ла кәрәк бит. Иң уңайлыһы - киске бүлек. Теләгән - моратына еткән. Йәш эшсе лә һин хәҙер, йәш студент та! Көнө буйына эштәһең, сменанан һуң иптәштәрең өйҙәренә таралыша, ә һинә, ни тиклем генә арыған булһаң да, нефть институты аудиторияларында лекциялар тыңлап, лабораторияларҙа экспериментттар уҙғарып, яңы нефть эшкәртеү технологияларына эйә булырға кәрәк. Ихтыяр көсөгөҙ тап ошо бигүк еңелдәрҙән булмаған ваҡытта һеҙҙең шәхесегеҙҙең бер ныҡлы һәм күркәм сифаты булып өлгөрҙө. Ә алдағы йылдарҙа тормош юлығыҙҙа күпме эрелеваҡлы кәртәләр, ауыр ситуациялар осраясағы уйығыҙға ла инеп сыҡмағандыр ул саҡтарҙа.

● 1960 йыл. Һеҙ Черниковка нефть эшкәртеү заводына күстегеҙ. 1957 йылда сафҡа индерелгән завод технология яғынан яңыраҡ та, йәш белгестең һөнәри карьераһы өсөн уңайлыраҡ та булыуын аңлағанһығыҙҙыр. 1962 йылдан бирле XXII съезд исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводы исемен алған ошо ҡеүәтле етештереү предприятиеһы һеҙгә тыуған йортоғоҙ кеүек ҡәҙерлегә әйләнде. Установка начальнигынан СССР-ҙа иң ҡеүәтлеләрҙән һаналған заводтарҙың береһе булған предприятие директорына тиклемге оҙайлы юл үттегеҙ. Һеҙҙен ише етәкселәрҙе ул саҡта "ныҡлы хужалыҡсы" тип атай торғайнылар. Теүәл өс тиҫтә йыл гүмерегеҙ ошонда уҙҙы: барыһын да - әсеһен дә, сөсөһөн дә яңы технологияларҙы бер-бер артлы үҙләштерә һәм ғәмәлгә индерә барған ошо заводта татырға тура килде һеҙгә. Ә бит һеҙ технологик новацияларҙы индереү өсөн шәхсән яуаплы белгес булдығыҙ. Шулай бер йылда һис көтмәгәндә заводта авария булды - көслө шартлауҙан бер кеше һәләк булды, бер нисә эшсе йәрәхәтләнде. Һеҙ төнөн ашығыс рәүештә заводҡа килеп етеп, аҙна буйына ошонда ҡунып-төнөп ҡалып, авария әҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнаштығыҙ. Бар эштәр тамамланыу менән, өйөгөҙгә ҡайтып етеүгә, кинәт ауырып йығылдығыҙ, хатта ятҡан урыныгыҙҙан торорлоҡ хәлегеҙ ҙә булманы. Табиптар ярҙамында яңынан аяҡҡа баҫтығыҙ ул саҡта.

Һуңынан да үҙегеҙҙе заводтан башҡа күҙ алдына ла килтерә алманығыҙ. Талапсан булһағыҙ ҙа, коллектив үҙ итте һеҙҙе, ә йәштәр өсөн торғаны бер атай инегеҙ. Инде күп йылдар үткәс, һеҙ туған коллективығыҙҙы шулай тип һағынып иҫкә алдығыҙ: "Завод. Ул ҡатмарлы һәм күп ҡырлы организм. Ул - тиҫтәләгән мең кеше, балалар баҡсалары, торлаҡ, тәьминәт. Һис көтөлмәгән нәмәләр менән шөғөлләнергә тура килде. Беҙҙең завод барса Өфө универмагтары ҡайтарғандан бер нисә тапҡырға күберәк киң ҡулланылыш тауарҙарын һатып ала торғайны. Беҙ үҙебеҙҙең хеҙмәткәрҙәребеҙгә кәрәк булған бөтөн әйберҙәр менән тәьмин итергә тырыштыҡ. Иҫемдә, һатып алынған 300 автомобилдән торған тәүге партия Борис Березовский машиналары булып сыҡты. Һуңынан тағы ла 1500 еңел машина ҡайтарҙыҡ. Ә ярҙамсы хужалыҡ һәр бер хеҙмәткәргә 38-әр кг ит етештерҙе".

● Уҙған быуаттың 80-90-сы йылдары... Кем генә уйлаған инде ул саҡта СССР Президенты Михаил Горбачев башлаған сәйәси һәм иҡтисади реформалар оло һәм ҡеүәтле державаны тарҡалыуға алып килер, тип. Үкенесле булды быныһы, һеҙ ҙә был хәлдәрҙе тәрән кисерештәр менән ҡабул иткәнһегеҙҙер - СССР-ҙың халыҡ депутаты, СССР Юғары Советы ағзаһы инегеҙ бит. Шулай итеп, заманыбыҙҙың сәйәси штормдары тыуҙырған тулҡындар һеҙҙе, әүәл тик етештереү һәм хужалыҡ проблемалары менән шөғөлләнгән кешене, Рәсәй кимәлендәге сәйәсмәндәр рәтенә күтәрҙе. Әлбиттә, талантһыҙ йә даланһыҙ заттар ошо дәүерҙең ҡырыҫ шартарында ҡыйыу һәм принципиаль эшмәкәрлек алып бара алмайынса, оло сәйәсәттән тиҙ арала төшөп тә ҡалыр ине. Ә һеҙ, һуғыш осоро балаһы, талымһыҙ хужалыҡ етәксеһе, көслө характерлы инсан булараҡ, сәйәсәт ыҙанында ла ныҡышмал, сыҙамлы, тотороҡло һәм тәүәккәл эш иттегеҙ, һис бер юғалып ҡалманығыҙ.

Әлбиттә, юғарыла ултырған етәкселәргә ҡатмарлы хәлдәр килеп тыуған саҡтарҙағы эшмәкәрлегегеҙ, үҙ һүҙегеҙҙә ныҡ тороуығыҙ оҡшап та етмәгәндер. Әммә һеҙ республикабыҙ мәнфәғәттәрен, халыҡ ихтыярын яҡларға, Рәсәйҙең төптән уйлап еткерелмәгән реформаларының кире һөҙөмтәләренән ябай халыҡты ҡурсаларға тырыштығыҙ. Ошо ике тиҫтә йыл дауамында, бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөгөҙгә алып, федераль үҙәк бер аҙға биреп торған үҙаллылыҡты оҫта файҙалана белдегеҙ. Һөҙөмтәлә ауыл хужалығы тулыһынса тар-мар ителеүҙән ҡотҡарылды, ҡеүәтле сәнәғәт предприятиелары эшләүен дауам итте, бик күп ауылдарға хыялда ла булмаған газ уҙғарылды, йөҙәр-йөҙәр саҡрым юлдарға асфальт һа-

*✓ Эйе, хөрмәтле ил ағаһы Мортаза Ғөбәйҙулла улы, һеҙ баҡыйлыҡҡа күскәс, беҙ һеҙҙең менән бергә үҙебеҙ йәшәгән тотош бер дәүер менән дә хушлаштыҡ. Ошо дәүер эҙһеҙ үтмәне, күп яҡшылыҡтар, изге эштәр башҡарылды.*



лынды, мендән ашыу мәктәп өр-яңынан төҙөлдө һәм реконструкцияланды, мәҙәниәт йорттары ҡалҡып сыҡты. Хатта ки, башҡа бер ерҙә лә күҙәтелмәгәнсә, яңы заводтар сафҡа индерелде.

Һеҙҙең башланғыстарҙы һанай китһәң - һанап бөтөрөрлөк тә түгелдер. Тик шуныһы ғына күңелдәребеҙҙе ҡыра: һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙҙе ҡабул итмәгән, тикте юҡҡа ғәйеп таҡҡан, үҙ карьераларын ғына ҡайғыртҡан сәйәси уйындар авторҙары һеҙгә ҡара яғырға маташты. Һеҙ уларға әллә ни иғтибар итеп тә барманығыҙ: тап Крылов мәсәлендәге кеүек килеп сыҡты - ул сәүектәр көслөбөҙ тип, филгә өрөп сыҡтылар, тик аҙаҡтан ҡасып-боҫоп бөттөләр.

Һеҙгә яғылған ғәйептәрҙең иң ҙуры - нефть сәнәғәте предприятиеларын хосусилаштырыу. Хәҙер барыһына ла билдәле бит - улай итмәһәгеҙ, өҫтәге олигарх төркөмдәре уларҙы барыбер рейдерҙарса тартып алыр ине. Ҡыҫым-баҫымдар ифрат көсәйгәс, барыбер республикаға файҙаһы ҡалыр тип, ошо предприятиеларҙы ПАЙ "Система" акционерҙар финанс компанияһына һатырға мәжбүр булдығыҙ. Барлығы 64 миллиард һумлыҡ финанс сығанағы хасил булды. Һеҙ ошо аҡсаларҙы "Урал" хәйриә фонды аша барса халыҡтарыбыҙ мәнфәғәтендә файҙалана башланығыҙ. Был изге ғәмәлдәрегеҙ һеҙ отставкаға киткәс тә дауам итте. "Әгәр ҙә суд аша тартып алмаһалар, ошо халыҡ байлығы һеҙ баҡыйлыҡҡа күскәс тә республикабыҙҙың ижтимағи инфраструктураһын камиллаштырыуға тотонолор ине. Әйтергә кәрәк, 2006 йылдан 2014 йылға тиклем "Урал" хәйриә фонды 285 ойошма файҙаһына 26,7 млрд һумлыҡ финанс сығымдары бүлде.

● Бына быйыл һеҙҙең тыуыуығыҙға 90 йыл тулыу айҡанлы Башҡортостан халыҡтары һеҙҙе бик тә хөмәтләп үә ҡәҙерләп иҫкә ала, баш ҡалабыҙҙа һеҙгә һәйкәл дә асылды. Һеҙҙе ололап иҫкә алғанда, ирекһеҙҙән һуңғы васыятығыҙ иҫкә төшә: "Ни эшләптер төштәремә ауылым йышыраҡ инә. Хәҙер тыуған ауылымда һирәк булам. Элегерәк, атай-әсәйемдәр тере саҡта, һәр ял һайын уларҙы ҡайтып күрә инем. Тәүәкәнгә ҡайтҡан һайын атай-әсәйемдең ҡәберҙәре янына барам, үҙемә лә ошонда, ағас аҫтында, саф һауала урын ҡарап ҡуйҙым. Минең менән хушлашҡанда тик бер ҡурай моңо ғына яңғырап тороуын теләйем".

Эйе, хөрмәтле ил ағаһы Мортаза Ғөбәйҙулла улы, һеҙ баҡыйлыҡҡа күскәс, беҙ һеҙҙең менән бергә үҙебеҙ йәшәгән тотош бер дәүер менән дә хушлаштыҡ. Ошо дәүер эҙһеҙ үтмәне, күп яҡшылыҡтар, изге эштәр башҡарылды. Ә һеҙҙе оҙатҡанда башҡорт ҡурайының мәңгелек моңо ағылды ла ағылды, әллә ул сикһеҙ иңрәне, әллә зар иланы, әллә инде ошо моңдар төпһөҙ күккә, асманға һеҙҙең изге йәнегеҙ менән бергә юлланды...

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ЗАМАН БАШҠОРТО*

# МИЛЛӘТТЕҢ БӨЙӨК КЕШЕЛӘРЕН...

## сәнғәт тыуҙыра

**Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының һынлы сәнғәт факультеты деканы, Башҡортостан Рәссамдар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Ш. Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Әмир МӘЖИТОВтың картиналары фәлсәфәүи тәрәнлек һәм милли рух менән айырылып тора. Иң әүҙем ижадсы булыуы менән бер рәттән, ул киләсәк быуын тураһында хәстәрлек күрә. Йәш рәссамдар уны үҙҙәренең остазы тип атай. Талантлы рәссам беҙ биргән һорауҙарға ихлас яуап бирҙе.**

**➔ Әмир Миңлевәли улы, рәссам булыу бала саҡ хыялы булғандыр. Шулай ҙа ниндәй көс һеҙҙе ошо юлдан тайпылмай атларға, һынлы сәнғәттә үҙегеҙҙе табырға ярҙам итте?**

- Тыуған ауылым Үрге Һаҙ Күгәрсен районында иң матур, хозур ерҙә урынлашҡан. Атайымдың бер туған апаһы һүрәт төшөрә ине. Мин ике-өс йәштәрҙә үк буш ҡағыҙҙа унын ниндәй матурлыҡ тыуҙырғанын күреп иҫем китә ине. Шунан башланды инде һынлы сәнғәткә мөхәббәт. Ап-аҡ ҡағыҙҙа һүрәттәр тыуа - был бит мөғжизә! Ошо серҙе асыу теләге ҡулыма ҡәләм тотторғандыр. Апайыма эйәреп, үҙем дә һүрәт төшөрә башланым.

Ҡайһы бер ижадсы алдында "Артабан нишләргә, яҙғандарым килеп сығамы-юҡмы?" тигән һорау тыуалыр. Ләкин бындай һорауҙы үҙемә һирәк бирҙем, Аллаға шөкөр. Сөнки, әйтәм бит, бәләкәйҙән тәбиғәтебеҙгә, һынлы сәнғәткә ғашиҡ булып үҫтем. Хәлдән килгәнсә шул йүнәлештә үҫергә тырыштым. Бына, мәҫәлән, мәктәптә уҡығанда Учалы районының Учалы ауылына күсендек. Ауылда художество мәктәбе юҡ. Ун километр алыҫлыҡта ятҡан Учалы ҡалаһына аҙнаһына өс тапҡыр уҡырға бара инем. Утыҙ градус һыуыҡтарҙа аяҡтарым туңған саҡтар ҙа булды. Февраль-ғинуарҙарҙа ҡайһы ваҡыт автобусҡа һуңлаһам, төндә ҡайта торғайным. Был һынауҙар бөтәһе лә миндә ихтыяр көсөн сыныҡтырҙы, мине ир-егет итеп тәрбиәләне. Атай-әсәйемә ҙур рәхмәт, миңә улар һәр саҡ дуҫ булдылар. Әле лә шулай. Инде улар оло йәштә, һаман да минең өсөн янып-көйөп йәшәйҙәр. Уларға сәләмәтлек теләйем. Еңеүҙәрем һәр саҡ уларға бағышланған.

Сәнғәт һәр милләт өсөн бөйөк кешеләрҙе тыуҙыра. Беҙҙең милләтте лә Салауат Юлаев, Шәйхзада Бабич, Рәми Ғарипов кеүек бөйөк кешеләр аша таныйҙар. Бөйөк рәссамдар, бөйөк музыканттар милләттең йөҙөн күрһәтәләр. Был юғары һүҙҙәр түгел. Аллаһы Тәғәлә ниндәйҙер һәләт биргән икән, әҙәм үҙ өҫтөндә эшләп, шуны үҫтерергә һәм үҙенең халҡына хеҙмәт итергә тейеш. Халыҡтарҙы белгебеҙ килә икән, уларҙы ни тиклем һарыҡ үрсетеүгә, ни тиклем алма үҫтереүгә буйынса баһаламайбыҙ бит. Миҫалға немец халҡын алайыҡ. Кешелек уларҙы Карл Маркс, Шопенгауэр, Кант һымаҡ бөйөк исемдәр аша таный, баһалай.

**➔ Һеҙ һоҡланған, үҙегеҙ өсөн өлгө итеп күргән рәссам булдымы?**



- Атай-әсәйемә рәхмәт, улар һәр саҡ беҙгә китаптар һатып алып ҡайтырҙар ине. Улар араһында башҡорт рәссамдары тураһында ла әҙәбиәт булыр ине. Башҡорт яҙыусыларын белеп үҫтем. Миңә биш йәштәр булдымы икән, бер мәл атайым "Рәссам Әхмәт Лотфуллин" тигән китап алып ҡайтты. Шул китапты иҫем-аҡылым китеп ҡараным. Ошо оло рәссам минең уҡытыусым ғына түгел, яҡын дуҫым да булып китер тигән уй хыялымда ла булманы, әлбиттә. Өфөгә уҡырға ингәс, Әхмәт Лотфуллин менән шул тиклем дуҫлашып киттек. Беҙҙең милләттең иң көслө рәссамы ул. Әхмәт ағай минең оҫтаханама аҙнаһына биш мәртәбә килә торғайны. Мостай Кәримгә, Борис Домашниковҡа һәм башҡа ижадсыларға: "Бына ул һынлы сәнғәттең киләсәге. Әмир Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең иң сағыу рәссамы буласаҡ", - тип таныштыра торғайны.

Ул минең өсөн иң оло шәхес һәм остазым. Уның тураһында мин: "Лотфуллин - башҡорт Рембрандты һәм башҡорт Микеланджелоһы", - тип әйткәнем бар. Бөтөн рәссамдарға ла, үҙемдең студенттарыма ла: "Ул бөйөк рәссам", - тип әйтә киләм. Әхмәт ағай бөтөн ғүмерен беҙҙең милләткә, халыҡҡа бағышланы. Йәнә лә "уҡытыусы" тигән саҡта, "Минең уҡытыусыларым күп", тип тә әйтә алам. Пикассо ла, Ван Гог та, Микеланджело ла, Рембрандт та - минең уҡытыусыларым. Ә иң яҡын аралашҡаны һәр саҡ эргәлә булғаны - Әхмәт Лотфуллин.

Минең картиналарым - етди эштәр. Улар аш йәки йоҡо бүлмәһенә элеп ҡуя торған һүрәттәр түгел. Өфөләге, Питерҙағы, Мәскәүҙәге сәнғәт һөйөүселәр һатып ала. Американа һынлы сәнғәт галереяһында Пикассо һүрәте менән йәнәш минеке лә эленеп тора. Ғорурланып әйтә алам, Израилдә, Португалияла, Италияла һәм башҡа күп илдәрҙең музейҙары минең һүрәттәрҙе һатып ала. Улар етди музейҙар, елбәҙәк һүрәттәр менән ҡыҙыҡһынмайҙар, ә мәңгелек темаларҙы яҡтыртҡан картиналарға иғтибар итәләр. Минең ижад үҙ эсенә алған тыуған ил, ир һәм ҡатын, хеҙмәт кешеһе, дин, рух, матурлыҡ темалары улар өсөн әһәмиәтле. Башҡортостанда ла, Аллаға шөкөр, Нестеров музейы йыл да минең һүрәттәрҙе алып тора, сөнки ҙур полотноларҙы эшләгәндәр хәҙер һирәк. Ә минең һүрәттәр, ғәҙәттә, ике метрлыҡ. Бындай дәүмәлдәге картиналарҙы эшләүе ауыр. Бәләкәй генә натюрморттар, пейзаждар төшөргән рәссамдар байыраҡ та йәшәйҙер. Әммә ғүмер ҡыҫҡа, шуға мин ғүмеремде тәрән һәм етди сәнғәткә арнайым. Килеп сығамы-юҡмы, быныһын Аллаһы Тәғәлә генә белә. Һәр хәлдә, рәссамдар минең эште хуплайҙар, йылы һүҙҙәрен еткереп торалар.

**(Дауамы 11-се биттә).**

ЯҘЫУСЫ ҺҮҘЕ

# УНЫ ЗАМАН БАРЛЫҠҠА КИЛТЕРҘЕ,

## йәки "Президент Рәхимов" романына бер ҡараш

**Күренекле яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим Хисамовтың "Ағиҙел" журналының 2020 йылғы август һанында баҫылған документаль романы Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов тураһында, ул "Президент Рәхимов" тип атала. Әҫәрҙең икенсе өлөшө 2021 йылда журналдың 10-11-се һандарында донъя күрҙе.**



**Романда күренекле шәхесебеҙҙең:**
**- бер кемгә лә оҡшамаған үҙенсәлекле характеры;**
**- халҡыноң башҡалар күҙлегенән сәйер булып тойолған күркәм яҡтары;**
**- ябайлығына уралған тәрән диҡҡәте;**
**- шаянлығына төрөлгән етдилеге;**
**- тәүәккәллеге;**
**- парадоксаль ихласлығы;**
**- халҡына хас эскерһеҙлеге;**
**- нәзәкәтле кинәйәһе;**
**- ил, ватан, моң, хеҙмәт һөйөүсәнлеге һ.б. сифаттары бар тулылығында художестволы деталдәр, әҙәби алымдар менән бәйән ителә. Ошо уңайҙан документаль роман авторы Ғәлим ХИСАМОВҡа бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек:**

**▸ Ғәлим Афзал улы, байтаҡ ҡына тарихи ваҡиғаларға, шәхестәргә арналған әҫәрҙәр ижад иткәнһегеҙ, итәһегеҙ. Нисек уйлайһығыҙ, тарихтағы конкрет шәхес менән әҫәр геройы араһында айырма булырға тейешме? Югиһә, әҫәр геройының ғәмәлдәге шәхес менән айырмаһын белеп ҡалған уҡыусы: "Ул былай түгел, тегеләй ине, алдашаһығыҙ", - тип яҙыусыға дәғүәһен белдерә башлай.**

- Был һорауға яуап бирер алдынан һуңғы дәүерҙәге бер шәхескә әйләнеп ҡайтайыҡ. Мин уға табыныу дәрәжәһенә барып еткәнлектән әйтмәйем. Юҡ миндә ундай тойғоларҙың береһе лә. Әгәр ҙә яҙыусы ысынбарлыҡтағы шәхестең портретын бермә-бер күсереп, фотопортрет барлыҡҡа килтерергә тырышһа, ул дөрөҫ түгел. Уҡыусыға ҡыҙыҡ та түгел. Дөрөҫөрәге, был яҙғаның әҙәби әҫәр булмай сыға. Һуңғы романдарымдың береһе документаль булған һүрәттә лә, ундағы геройҙы үҙем яһарға тырыштым.

Иң тәүҙә геройым йәшәгән дәүер характеристикаһын ҡарап үтәйек. Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап 2010 йылға тиклемге ваҡиғалар күптәребеҙҙең хәтерендә. Күбебеҙҙең аңына ла, ҡанына ла һеңгән, ғәрәнә лә тейгән, йәненә лә еткән ваҡиғалар улар. 90-сы йылдарҙағы буш кәштәләрҙе күрмәй хәлебеҙ булманы. Сөнки һәр беребеҙгә көнөнә өсәр тапҡыр тамаҡ туйҙырырға кәрәк ине. Тамаҡ туймайынса тороп, бүтән нәмә тураһында уйлап булмай. Шуның нигеҙендә барлыҡҡа килгән сәйәси ҡуҙғалыштар. Кәштәләр таҡырайғас, синыфтарҙың береһе лә ҡалманы. Синыф та юҡ, идеология ла юҡ. Йәғни беренсе сиратта материя, икенсе сиратта - аң. Был совет дәүләте уйлап сығарған тәғлимәт түгел. Ул - боронғораҡ.

Шул саҡта 40-50 йәштәр араһындағы бер төркөм ир-ат уҙара һөйләшеп, бер фекергә киләләр. Ул да булһа Өфөнөң ҙур нефть эшкәртеү заводының генераль директоры булып эшләгән Мортаза Рәхимовты Башҡортостандың Юғары Советына депутат итеп, аҙаҡ Юғары Советҡа рәйес итеп һайлау. Әйтеүе генә еңел. Әммә ошо кешеләр шул көндә ҡорған ниәтен тулыһынса бойомға ашыра. Улар: Исмәғил Ғәбитов, беренсе сиратта - ул, уның янында йөрөүсе Венер Аҙнағолов, Юрий Шәрипов, ул ваҡытта Күгәрсен районының колхоз рәйесе Рамаҙан Әбдрәхимов. Улар тәүҙә дүртәүләп ултырып һөйләшә лә, шул уҡ көндә Мортаза Рәхимов янына бара. Тәүҙә завод директоры уларҙы: "Эшегеҙ юҡмы ни, һеҙ нимә?" - тип һүгеп ташлай. Шулай әйтерлек тә шул, сөнки ул был ваҡытта СССР Юғары Советы депутаты була. Билдәле, уларҙың был тәҡдимен ул кәмһетеү тип ҡабул итә. Шулай ҙа ул был дүртәүҙең тәҡдиме тураһында оҙаҡ ҡына итеп уйлай.

Шул ваҡытта тыуған ауылына ҡайтып килергә була. Ауылдаштары менән күрешеп һөйләшә. Уларҙың үҙе сығып киткәндәге һымаҡ ябайлығы күңеленә үтеп инә. Шул саҡта ауылға Ырымбур яғынан автолавка килгән була. Улар сауҙа итә. Шунда бер ауылдашы: "Ошо автолавканы нишләп үҙебеҙҙекеләр ойоштора алмай икән?" - тип әйтеп ысҡындыра. Быны ишеткән завод директоры уйға ҡала. Ысынлап та, нинә ошоно үҙебеҙ ойоштора алмайбыҙ һуң, тигән һорау тыныслығын ала. Был - депутат була торған кешенең беренсе уйы. Ошонан һуң, ысынлап та, депутат булырға әҙер була. Тормош, заман уға ошо юлдарҙан китергә үҙе ҡуша. Мәжбүр итә. Шул замандағы тарҡаулыҡ, бөлгөнлөк, әр уның өсөн эҙһеҙ үтмәй. Ул заманда урамда һүгенеп һөйләшмәгән кеше юҡ ине. Урам тулы мат торҙо. Бигерәк тә башҡорт кешеһе улай һөйләшергә өйрәнмәгәйне. Мин үҙем, мәҫәлән, урамда һүгенгән кешене бик ауыр ҡабул иттем. Минең ҡайным ҡарт Башҡорт ғәскәре сафында Петроградҡа барған. Шунда ул бөрйән ырыуы башҡорттарына аптыраған. Бар белгән һүгенеү һүҙҙәре "тыума" ти. Береһе шул һүҙҙе әйтһә, икенсеһе үсегә ти. Былары - һүҙ ыңғайында ғына.

Шундай заман Мортаза Рәхимовты барлыҡҡа килтерә. Исмәғил Ғәбитов һаулығы арҡаһында эшенән китергә йөрөгәндә Мортаза Рәхимов уға рәхмәт әйтеп: "Әгәр ҙә Исмәғил Ғәбитов булмаһа, мин бөгөн һеҙҙең алдығыҙҙа президент булып баҫып тора алмаҫ инем", - ти. Әхмәтзәки Вәлиди Зәйнулла Рәсүлевты таныған һымаҡ килеп сыға был ваҡиға. Ошо хәл халыҡ менән шәхестең бер үк икәнен дә күрһәтә.

**▸ Завод директорына сәйәсәткә тотоноуы бигүк еңелдән булмағандыр инде, тип тә уйланыла…**

- Ул генераль булһа ла, завод директоры. Бер ваҡытта ла сәйәсәт менән шөғөлләнмәгән. Рәхимов машинаһын саҡырып алып, заводына барып, халыҡтың йыйып хушлаша. Рәхмәт әйтеп, күҙҙәре еүешләнер алдынан сығып китә. Рәхмәт әйтә белеү - башҡорттоҡтоң бер һыҙаты. Кешегә рәхмәтле булыу - ҙур нәмә. Был да шәхесте барлыҡҡа килтереүсе билдә. Ошо хәл уның артабанғы эшенә әҙерләгән күрһәтә.

Заводтан сыҡҡас, ул хәҙерге Милли музейҙа урынлашҡан Юғары Советҡа килә. Уны ул ваҡытта Юғары Совет секретары Вилләр Дауытов ҡаршылай. Ул ваҡытта шәхесте күтәреүсе көс - суверенитет өсөн көрәш. Мәскәү ул саҡта мөлкәт өсөн үҙара ыҙғыша. Башҡортостан ҡайғыһы уларҙа бик самалы. Юғары Совет үҙенең 2-се ултырышында Башҡортостан Республикаһы Суверенитеты тураһында Декларация ҡабул итә. Беҙҙең Декларация ул ваҡытта, хәҙерге күҙлектән дә, бик аҡыллы яҙылғайны. Мәҫәлән, чечендар ул ваҡытта үҙҙәрен бойондороҡһоҙ дәүләт итеп иғлан итте. Татарстан иһә үҙен Рәсәй менән тиң дәүләт тип атаны. Быны белгән Силәбе өлкәһе уларға тейешле вагондарҙы ебәрмәй башланы. Эш шуға тиклем барып етте. Башҡортостан иһә яңы Рәсәй эсендәге бойондороҡһоҙ республика. Ошо форма Башҡортостанға үҙаллы йәшәргә лә мөмкинлек бирҙе.

**▸ Ғәлим Афзал улы, һеҙ ул саҡта Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда барған барлыҡ ваҡиғаларҙы ла романығыҙға индерә алдығыҙмы? Әҫәргә инмәй ҡалғандары ла барҙыр бит?**

- Әлбиттә, бар. Әйтеүемсә, роман ул ваҡыттағы ваҡиғаларҙың стенографик яҙмаһы түгел. Быны романға инмәй ҡалған бер ваҡиғаларҙың береһе. Исмәғил Ғәбитов Мәскәүгә барып, СССР Премьер-министрына инеп аҡса һорай. Павлов уға:

- Аҡса бит үҙегеҙҙә, беҙҙә бер нәмә лә юҡ. Хәҙер республикалар ғына түгел, өлкәләр ҙә беҙгә һалым түләмәй. Ҡаҙнабыҙ буш. Хатта үҙебеҙҙең хеҙмәткәрҙәргә лә эш хаҡы түләй алмайбыҙ, - ти.

- Улай булғас, хәҙер нимә эшләргә уйлайһығыҙ инде? - тип һорай унан Исмәғил Ғәбитов.

- Һеҙгә ҡарап торабыҙ инде...

Өфөгә ҡайтҡас, был һөйләшеүҙе ул Мортаза Рәхимовҡа еткерә. Бынан һуң Башҡортостан да Мәскәүгә аҡса күсермәй башлай. Суверенитет уларға был хоҡуҡты бирә. Хәтерегеҙҙә булһа, Мортаза Рәхимов ул ваҡытта күберәк иҡтисади үҙаллылыҡ тураһында һөйләне. Бында үҙенә күрә тактика ла бар. Иҡтисади үҙаллылыҡ беренсе урынға ҡуйылһа, икенсеһе - сәйәсиһе үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә. Туктың һәләне ас белмәй.

Ошондай туктауһыҙ ҡытыршылыҡтар, көн һайын хәлителергә тейешле мәсьәләләр Мортаза Рәхимовты көрәштең уртаһына килтереп ҡуя. Унда йә үләһең, йә тере сығаһың, башҡа юл юҡ.

Романдың тәүге өлөшө 1993 йыл менән тамамлана. 24 декабрҙә Башҡортостан Республикаһының яңы Конституцияһы ҡабул ителә. Иртәгеһенә Мортаза Рәхимовты Президент итеп ант иттерәләр. Шул ваҡиғанан алдараҡ ул Мәскәүгә кәңәшмәгә барып төшә. Домодедово аэропортынан Кремлдең автоидарағына шылтырата. Уға машина ебәрмәгәндәр. Нишләп? Уға саҡырылғандар исемлегендә фамилияһы юҡлығын әйтәләр. Такси ала ла, Кремлгә китә. Кәңәшмә башланырға күп тә ҡалмаған. Теркәлеү үтергә бара. Унда тағы ла исемлектә булмауы хаҡында әйтәләр. Эштәр идаралығына, Николай Медведевҡа барып инә. Бында телеграммаға ярашлы республиканың башҡарма власть етәкселеге саҡырылыуы билдәле була. Ә ул Юғары Совет рәйесе.

Ҡайтып китә Рәхимов. Ҡайтҡас та президент һайлауына тотона. Ике йыл алдан "Башҡортостан Республикаһы президенты тураһында"ғы закон ҡабул ителгән була.

**▸ Мортаза Рәхимовтың шундай шәхес булып китеүенә Исмәғил Ғәбитов етәкселегендәге ул төркөмдән тыш, тағы ла кемдәр йоғонто яһай?**

- Исмәғил Ғәбитовтың үҙ һүҙәре менән әйткәндә, ул Аҡ йортта ҡуна-ятып эшләй. Иң ауыр һәм мәшәҡәтле эштәрҙең береһе - документтар әҙерләү. Уларҙы бер ерҙән дә күсереп булмай. Сөнки өлгөләр үҙҙәре юҡ. Шул уҡ ваҡытта Исмәғил Ғәбитов тирәһендә тупланған башҡа бик күптәрҙе ситтә ҡалдырып булмай. Ә Мортаза Рәхимовтың ҙур етәксе булып китеүе иң беренсе нәүбәттә үҙенән. Ул үҙен-үҙе тәрбиәләй. Романдың 1-се өлөшөндә 5-се класс малайы Мортаза күрше ауыл кешеһе менән ер мәсьәләһе буйынса әләгешә. Ер бит ул! Бына шулай ҡандан килгән ынтылыш уны шәхес итеп күтәрә.

**▸ Башҡортостандың халыҡ шағиры Александр Филиппов Күгәрсен районының Йомағужа ауылы мәктәбендә уҡығанда Мортаза Рәхимов менән һабаҡташ булған. Уның һөйләүенсә, буласаҡ республика президенты ошо мәктәптә уҡыған ауылдаштарын урындағы егеттәрҙән ҡыйырһытырға юл ҡуймаған, кәрәк икән, дөрөҫлөгән йоҙроҡ менән дә раҫлаған…**

- Эйе, ул мәктәптә лидер була. Романда уның бер ҡыҙҙы яҡлап һуғышҡанын һүрәтләнем. Бер мәл ул кейем элгән булмәгә барып инһә, Гена тигән малай бер ҡыҙҙы урыҫса насар белгәне өсөн үсекләп мataша. Мортаза уны яҡлап һуғышып китә. Әгәр ҙә ул шунда ҡыҙҙы яҡламай ситкә китһә, тарих шуның менән ябылыр ине.

**▸ Шул уҡ ваҡытта ауылда тыуып үҫкән башҡорт балаһының СССР кимәлендәге ҙур Нефть эшкәртеү заводының генераль директоры булып китеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй бит?**

- Эйе, кешенең ынтылышы математиканы, тригонометрияны, химияны яҡшы белеүенә генә бәйле түгел. Ул заводтың баш химигы ла булып эшләй, шунан баш инженер, шунан генераль директор, шунан Юғары Совет рәйесе, шунан Президент. Бындай юғары осошло юлды кеше яҙмыш йылмайыуы ярҙамында ғына үтә алмай. Бының өсөн шәхес фиҙакәрлеге, рух бөйөклөгө талап ителә.

**▸ Әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Ғәлим Афзал улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ғүмереңде нисек үткәрәһең, үҙеңдән һуң да шундай уҡ мираҫ ҡалдыраһың. Үҙемдең уҡыусыларыма ла был турала көн дә тиерлек тылҡыйым. Кеше ғүмере бик ҡыҫҡа ғына, тимәк, уға етди ҡарарға, яуаплы мөнәсәбәттә булырға кәрәк.***



ЗАМАН БАШҠОРТО

# МИЛЛӘТТЕҢ БӨЙӨК КЕШЕЛӘРЕН...

## сәнғәт тыуҙыра

(Башы 9-сы биттә).

**➔ Һеҙ үҙегеҙ ҙә күптәр өсөн бөгөн - уҡытыусы. Һынлы сәнғәттең киләсәге, йәш ижадсылар тураһында фекерегеҙҙе белге килә. Улар араһында үҙегеҙ атаған исемдәргә лайыҡлы рәссамдар сығырына ышанаһығыҙмы?**

- Институтҡа 2000 йылда саҡырып алғайнылар, хәҙер егерме дүрт йыл эшләйем. Бик күп өлкән быуын ижадсылар - яҙыусылар, рәссамдар, музыканттар менән дуҫмын. Улар: "Әмир, һинең ике ҡанатың бар", - тип әйтәләр. Әхмәт ағай ҙа: "Һынлы сәнғәт һәм уҡытыу - һинең ике ҡанатың", - ти торғайны. Әлбиттә, уҡытыусылыҡ эше ваҡытты ала, нисек кенә булһа ла, мин бит үҙемде ижадсы тип иҫәпләйем. Йәшәү мәғәнәм ижад булһа ла, буяҡ-киндер алыр өсөн барыбер аҡса табырға тейешмен.

Шәкерттәргә килгәндә, улар миңә хөрмәт менән ҡарай. Сөнки оҫтаханама килеп йөрөйҙәр, күп эшләгәнемде күрәләр, һәр әйткән һүҙемә ҡолаҡ һалалар - мин бит теория буйынса ғына уҡытыусы түгел, майлы буяуы ҡулынан төшмәгән, эш серҙәре менән ихлас уртаҡлашҡан тәжрибәле рәссаммын.

Студенттарым менән яҡындан аралашам, бер ниндәй ҙә кәртәләр юҡ. Бәйләнештең ныҡлығы рухи туғанлыҡтан, улар һәр саҡ минең эштә икәнде күрә. Сәнғәт - бик тәрән дә, ауыр ҙа бер донъя, шуға һөйләшеү фәлсәфәүи тәрәнлектә бара. Күп кенә рәссамдар: "Ысын сәнғәт, һынлы сәнғәт коммерциянан, табышлы аҡса эшләүҙән йыраҡ тора", - тип әйтәләр. Уны хатта шахта менән дә сағыштыралар. Маяковский: "Тонна мраки, тонна руды", - тигән бит. Беҙҙең сәнғәт шулай, хыялындағы бер генә һүрәтте килтереп сығарыр өсөн ҡайһы бер рәссамдарға тонна буяу сарыф итергә тура килә.

Сәнғәттең киләсәге, тигән һорауға ошолай тип яуап бирер инем: ысын, бөйөк рәссамдар күп булмай, бөйөк яҙыусылар күп булмай. Аллаһы Тәғәлә бик аҡыллы, хикмәтле хәл иткән, әгәр ҙә һин тормошоңдо яратҡан һөнәреңә генә арнайһың, күп нәмәңде уның хаҡына ҡорбан итәһең икән, был бөйөк ижадсы юлы. Хәҙер бит алдатҡыс, әүрәткес нәмәләр бик күп. Йәштәр ана шундай океан төбөнә төшөп китмәһә, күп нәмәгә өлгәшә ала. Сократ юҡҡа ғына: "Кеше ғүмере - үҙе менән көрәш", - тип яҙмаған. Кант менән Шопенгауэр ҙа "Тормош үҙең менән һуғыш", тигән. Был дәрәҫлеккә тура килә. Сөнки ихтыяр, аҡыл, йөрәк, хис-тойғоларҙы даими тәрбиәләмәһәң, үҙеңдә соксонмаһаң, китап уҡымаһаң, фекерләргә өйрәнмәһән, донъяны өйрәнмәһән, тирә-йүндә нимә барғаны менән ҡыҙыҡһынмаһаң, ҙур ижадсы булыуың да бик-бик икеле.

Рәссам - ул философ, тарихсы, тормошто күҙәтеүсе, шағир. Минең шәкерттәр араһында көслө-көслө ижадсылар бар. Уларҙан һәйбәт рәссамдар сығырына шикләнмәйем, кемеһелер





бөйөк рәссам да булып китер. Ни өсөн сыҡмаһын, ти! Маҡсатҡа өлгәшеү иң тәүҙә кешенең үҙенән тора. Өмөтөм ҙур. Тағы ла ҡабатлайым, Башҡортостан - шундай талантлы төбәк.

**➔ Темалар нисек табыла? Хеҙмәт емешен күреп ҡыуанған сағыу мәлдәрҙе лә иҫкә төшөрәйек.**

- Алда әйткән мәңгелек темалар - туған ил, дин буйынса гел уйланып йөрөйөм. Минең "Бәйғәмбәрҙәр. Әүлиәләр" тигән ҙур бер сериям бар. Ҡартатайым указлы мулла булған. Ҡәрсәйем, өләсәйем Ҡөрьәнде яттан белгән кеше. Улар миңә бәләкәстән Юныс, Йософ, Дауыт, Сөләймән бәйғәмбәрҙәр тураһында һөйләй торғайнылар. Уларҙы бәләкәй саҡта әкиәт һымаҡ ҡабул итһәм, хәҙер улар минең иждадтың төп йүнәлештәренең береһе булып китте, ҙур серияға әйләнделәр. Был картиналарҙы төрлө-төрлө сит ил музейҙары һатып ала. Етди, тәрән темалар тураһында гел уйлап йөрөгәс, идеялар башта тыуып тора. Уларҙы хәлдән килгәнсе тормошҡа ашырырға тырышам. "Рәссам" һәм "Шағир" тигән ҙур серияларым бар.

"Ҡул тирмәндәре" серияһын айырып әйтергә кәрәктер. Элек башҡорттар ҡул тирмәнен киң файҙаланған бит. Минең оҫтаханамда ҡартатайымдың ҡул тирмәне ултыра. Ошо темаға арналған картиналарым - илдәр буйлап таралған ике метрлыҡ һүрәттәр. Нестеров музейында ла һаҡлана. Тирмән - гел уйланып йөрөгән темаларҙың береһе, сөнки беҙҙең һәр беребеҙ тормош тирмәне аша үтә бит. Кемдер үҙенән һуң он, ә кемдер саң ғына ҡалдырып үтә. Ғүмереңде нисек үткәрәһең, үҙеңдән һуң да шундай уҡ мираҫ ҡалдыраһың. Үҙемдең уҡыусыларыма ла был турала көн дә тиерлек тылҡыйым. Кеше ғүмере бик ҡыҫҡа ғына, тимәк, уға етди ҡарарға, яуаплы мөнәсәбәттә булырға кәрәк. Шуға ла үҙемдең идеяларымды тормошҡа ашырырға тырышам. Килеп сығамыюҡмы, быны аҙаҡ Хаҡ Тәғәлә генә хөкөм итер. Һәр хәлдә, рәсемгә төшөрөү минең маҡсат булып ҡала.

Хеҙмәттең емешен табып ҡыуанған сағыу мәлдәр, башлыса, ижад менән бәйле. Һеҙ яҙыусы, әҫәрҙәрегеҙҙе уҡығаным бар. Шуға һеҙ мине тиҙ аңлайһығыҙ - һинең менән ҡуша тәрән диңгеҙҙә йөҙөп йөрөгән һөнәрҙәштәреңдең баһаһы иң юғары баһа, шулай бит? Был бәхет. Аллаға шөкөр, миңә коллегаларым биргән баһа ҡиммәт. 1998 йылдан Башҡортостан рәссамдар союзы идараһы ағзаһымын, дүрт йыл һайын ҡабат һайлап ҡуялар. Был минең ижадымды хөрмәт итеү, уның тәрәнлеген баһалау. Ә Башҡортостанды алғанда, ул рәссамдар төбәге. Бында Европа менән Азияның мөхәббәте лә, көрәше лә сағыла. Ул ҡайнап торған ҡаҙан. Ошо рәссамдар төбәге булған ерҙә ҡәләмдәштәрем ыңғай баһа бирә икән, был мине алдыңғы ҡарашлы ижадсыларҙың береһе тип таныуҙан килә. Быының өсөн халҡыма, атаәсәмә рәхмәт әйтәм һәм алда барырға, һынатмаҫҡа тырышам.

**Һорауҙарҙы**
**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**бирҙе.**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



# ГҮР САҘАҠАҺЫ

Яңы ғына өйләнешкән саҡ. Тәүге осорҙа әллә нишләп һуҙһаҡ-тартһаҡ, йыйнаҡ тотонорға тырышһаҡ та, эш хаҡын еткереп булмаһы ла ҡуйҙы, тормошобоҙҙо үҙебеҙсә, яныса ҡорорға тырышҡас, өй эсенә ул-был ҡаралтыны һатып алабыҙ, башҡалар алдында кәм-хур булғы килмәй ҡуҫтарланабыҙ ҙа. Ҡунаҡтарҙан ҡалмайбыҙ, үҙебеҙ ҙә саҡырабыҙ, тыуған көндәргә лә йөрөйбөҙ, улары ла өҫтәмә сығым. Нисек кенә һаҡсыл, иҫәпләп тотонорға тырышһаҡ та, икебеҙгә тәғәйен мәктәп оклады, әсәйемдең алған пенсияһы тотошлайы менән айынаҡы айына китте, бик йыш ҡына етмәй ҙә ҡалды әле. Хәйерселәй, ҡайта-ҡайта кешенән теләнселәү ҙә килешмәгән эш, ни тиһәң дә, ауылдаштар араһында, дуҫтар алдында дәрәжә лә, абруй ҙа бар һымаҡ, мәжлестә ултырған ер ҙә ишек төбөндә түгел. Үҙебеҙҙең ҡорҙа билгән урыныбыҙҙы әйтеүем. Һуңғы сиктә көн тағы ла әсәйемдең гүр саҙаҡаһына тороп ҡала. Осто-осҡа ялғай алмай, бөтөнләй өҙөлөп киткәндә әйтеремде асыҡтанасыҡ ярып һалмаһам да, туранан һалдырам:

- Әсәй, кеҫәбеҙ төбө таҡырайып китте бит әле, төйнәнгәнеңде тотонайыҡ мәллә?

Ә ул нимә хаҡында һүҙ барғанын шундуҡ тойомлап, төшөнөп тә ала:

- Ҡапылғара үлеп-нитеп китһәм, ҡайһылайтырһығыҙ икән?

Әсәһен һәр бала был донъяға ғүмерлеккә килгән тип иҫәпләй шул, тормошто булмаҫ, ысынбарлыҡҡа тап килмәҫ ошо хәлгә ышана, ышаныу ғына түгел, инана ла. Ғүмерлеккә килгән дә, йыһылыҡ, яҡтылыҡ бөркккән аҡ ҡая ышығылай, ул беҙҙе һәр саҡ ел-ямғырҙан һаҡлап, ҡурҡыныс-хәүефтән аралап, ҡасан йоҡоға ятҡанын, ҡасан йоҡонан торғанын күрһәтмәй, белгертмәй төрлек әйләнәһендә ығырлап-шығырлап, әммә ауырыу-һыҙланыуҙарын тышҡа сығармай аяғөҫтә йөрөп ятыр һымаҡ.

Мин дә ҡурҡыныс хәбәрҙе яҡын-тирәбеҙгә әйләнтмәй, ҡыуалап ебәрергә теләгәндәй, сәбәләнеп, ҡулдарымды болғайым:

- Буш һүҙ һөйләп, күңелгә шом һалма әле!

- Буш һүҙ, тип, донъялыҡта була торған хәл.

- Булһа ла һөйләмә, ауыҙыңдан ел алһын!

Әсәйем ғәҙәти, көтөлгән, кисектергеһеҙ сәфәргә йыйынғандай, тыныс тауыш менән үҙенекен тыҡый бирә:

- Бер көн менән йәшәйем мин хәҙер, иртәгә ни булырын бер Хоҙай белә. Өй беренсә теүәлләп хисаплай китһәң, әхирәттәремдән бер үҙем генә ҡалып барам бит, сама белмәй әрһеҙләшергә лә ярамай. Ғәзраилдың юғарынан әшкәртеүен көтмәй, алдан йыйына, төйнәнә башлауың хәйерле.

- Бирәсәкле кеше үлмәй тиҙәр, һин дә хәйергә әҙерләгәнеңде тотоноп, бурысҡа бат та, йәҙгә еткәнсе йәшә!

- Ни хәл итәһең, һүҙҙегеҙҙе йығыу килешмәҫ, Хоҙай Тәғәләнән әхиреткә күсеүҙе бер аҙ кисектереүен һорармын. Артыҡлап мулыҡмаһа ла, ризалашыр, бәлки, үтенесемде ҡабул ҡылыр... - Шулай ти ҙә, һандығына тыҡшырған яулыҡтаҫтамалдар араһын аҡтарырға, соҡорға тотона.

Әсәйемдең биргәнен алабыҙ ҙа онотабыҙ, сөнки беләбеҙ, бер ни тиклем ваҡыттан, ниндәйҙер беҙ белмәгән юлдар аша саҙаҡа теүәл генә булып урынына барып ятасаҡ.

Оҙаҡ та үтмәй, һөйләшеү тағы ҡабатлана...

Һуңынан матди яғыбыҙ яйға һалынды, хәлбүки әсәйем йомошҡа тип ингәндәргә һандығы төбөндәгеп биреп сығарыуҙы ғәҙәт итеп алды. Шулайтып, әжәл алдында бирәсәкле булып, ғүмерен оҙайтып, һикһәнгә еткәнсе йәшәне. Бөгөн мөмкин булмағанды ялбарып ҡыҫҡырғым килә:

- Тәңре, үтенеп һорайым, әсәйемде кире ҡайтар. Уның алдында әллә күпме ҡайтарылмаған бирәсәктәрем, бурыстарым бар!

✓ *Әсә һөйөүеме ул, мөхәббәт хисеме - әҙәм балаһы үҙенең яратылыуын белеп йәшәргә тейеш. Психологтар әйтеүенсә, әсә кешегә балаһын көнөнә һигеҙ тапҡыр ҡосағына алып һөйөргә кәрәк икән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СӨСКӨР РӘХӘТЛӘНЕП

■ Кәбеҫтәне эшкә лә, ашҡа ла һанамаған булһағыҙ, был яңылыҡ һеҙҙең өсөн. Кәбеҫтәнең һәр төрө шифалы, сөнки ул витаминдарға, минералдарға, антиоксиданттарға бай. Тимәк, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән һаҡлай, иммунитетты нығыта, аш һеңдереүҙе көйләй һәм, һеҙәмтәлә, тиренең торошо ла яҡшыра. Был турала табип-диетолог, гастроэнтеролог, терапевт Александра Разаренова белдерә. Кәбеҫтәнең организмдағы С һәм К витаминдары ҡытлығын тулыландырыуы ғына ла уны йышыраҡ ашау өсөн сәбәп булып тора. Төҫлө, брюссель кәбеҫтәһе калий һәм фолий кислотаһы, брокколи кальций һәм А витамины сығанағы. "Яман шеш сирен профилактикалау өсөн дә кәбеҫтә ашарға кәрәк, сөнки унын составындағы глюкозинолаттар тураҡанда, сәйнәгәндә сульфорафан тигән биологик әүҙем матдәгә әйләнә. Ҡайһы бер тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тап сульфорафандар яман шештең бөтөн төрҙәрен дә иҫкәртеү һәләтенә эйә", ти табип.

■ Кеше араһында булғанда сөскөрөргә оялып, уны нисек тә булһа баҫырға тырышаһығыҙмы? Роспотребнадзор быныҡ хәүефле булыуы хаҡында белдерә. Был осраҡта ҡолаҡ ярыһы зарарланыуы, күҙҙең ҡан тамырҙары шартлауы, танауҙан ҡан китеүе, танау ҡыуышлығының зыян күреүе, баш ауыртыуы ихтимал. Сөскөргәндә тын юлдарында баҫым күтәрелә, был иһә баш мейеһе эшмәкәрлегенә лә насар. Белгестәр нисек дөрөҫ сөскөрөргә кәрәклеген дә аңлата. Тукыма йәки ҡағыҙ ҡулъяулыҡ менән танауҙы һәм ауыҙҙы ҡапларға һәм сөскөрөргә, һуңынан ҡулъяулыҡты ташлап, ҡулдарҙы һабынлап йыуып ҡуйырға кәрәк.

■ Ҡышын күптәр сәсе ҡойолоуға зарлана. Трихолог, медицина фәндәре кандидаты Анастасия Курская әйтеүенсә, көнөнә 50-150 бөртөк сәс ҡойолоуы норма иҫәпләнә. Тик ҡышын башлыҡ кейеү, йылытыу системаһы эшләгәнгә күрә йорттарҙағы һауаның ҡоро булыуы уҙ эшен эшләй. Урамдағы температураның да үҙгәреп тороуы сәстәргә стресс "кисерергә" мәжбүр итә. Йыуған саҡта сәстең күберәк ҡойолоуында ла насарлыҡ юҡ, шулай уҡ көн һайын сәс йыуыу уларға насар тәьҫир итә тигән фекер ҙә хаталы. Шампунь һәм кондиционер дөрөҫ һайланһа, таҙа сәстәр, киреһенсә, яҡшы кәйеф кенә уята. Шулай ҙа сәсем нык ҡойола, тигән фекерҙәһегеҙ икән, табип һеҙгә бик күңелле тест тәҡдим итә: аҙна буйына ҡойолған сәсегеҙҙе йыйып бараһығыҙ һәм уларҙы һанап, етегә бүләһегеҙ. Ҡасан сәс күберәк ҡойолоуын да беләсәкһегеҙ, бәлки, йыуғандан һуң ҡойолһа ла, башҡа көндәрҙә башығыҙҙан бер бөртөк тә сәс төшмәйҙер.

■ Үткән аҙнала Санкт-Петербургта Ҡытайҙан ҡайтыусы ике туриста маймыл сәсәге асыҡланғайны. Улар Гонконгта ял иткән булған. Вирусолог, Гамалея исемендәге Эпидемиология һәм микробиология үҙәге профессоры Анатолий Альтштейн билдәләүенсә, Рәсәй өсөн маймыл сәсәге ҡурҡыныс түгел. Былтыр ҡайһы бер илдәрҙә был сир 80 мең кешелә теркәлһә лә, аҙаҡҡы мәлдәрҙә был сирҙе йоҡтороусылар һаны күпкә кәмегән. Вирусты Африкала йәшәүсе кимереүселәр тарата, уларҙан маймылдарға һәм улар аша кешеләргә йоға.

ӘЙ, ЯҘМЫШ!

# ЯРАТЫЛМАЙ ЙӘШӘҮ...

## мәңге күңел өшөү



**- Әсәй, һин мине яратаһыңмы?**
**- Әлбиттә, яратам.**
**- Ә ниңә шулай тип миңә әйтмәйһең?**
**- Һуҙ менән ишеттереүҙәме ни эш?**
**- Эйе, һин һәр ваҡыт шулай тип әйтеп тор...**
**- Ҡыҙым менән ошондай һөйләшеү булды яңыраҡ, - тине бер ханым. - Инде ҙурайып бөткәс, университеттың III курсында уҡый бит инде, ҡосағыма һыйынып, иркәләнеп, яраттырып сығып китте. Үҫкәс тә, бәләкәй саҡтағы һымаҡ, һөйөүгә мохтаждыр тип уйламай инем...**

Был һөйләшеү миңә унан бер нисә көн алда ғына булған ваҡиғаны хәтерләтте. Бер көндө редакцияға элекке йәш хәбәрселәребеҙҙең береһе килеп инде. Мәктәптә уҡыған йылдарынан һуңғы тормошо хаҡында һөйләне. Ҡырҡты үткән ҡатын уҙ ғүмерендә әсеһен дә, сөсөһөн дә байтаҡ татып өлгөргән. Үҙе бер китаплыҡ яҙмыш. Һунынан, аптыратып, былай тине:

- Ә, беләһегеҙме, ни өсөн минең тормошом шулай килеп сыҡты? - Яуабымды ла көтмәй, артабан дауам итте. - Сөнки мине атайым менән әсәйем яратманы...

Аптыраулы ҡарашым уны ғәжәпләндермәне.

- Мине генә түгел, бөтәбеҙҙе лә. Өсөбөҙҙөн дә тормошо килеп сыҡманы. Атайым менән әсәйемде иң беренсе сиратта матди байлыҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Мин улар теләгән һөнәрҙе һайланым. Шунан атайым янына килдем дә ҡурҡа-ҡурҡа һуҙ башланым: "Хәҙер үҙем теләгән һөнәрҙе үҙләштерергә рөхсәт итегеҙ инде, бик тә бейеүсе булғым килә", - тинем. Утын түмәрҙәре янында торған атайым бер кисәүҙе ҡулына тотто ла бар көсөнә ерғә һуҡты: "Ботондо һуғып һындырам!" Яуабы шул булды. Аяғыма саҡ теймәй ҡалған кисәү шул көндә минең киләсәгемдә селпәрәмә килтерҙе. Бейеүсе булмаһам да, мәҙәниәт өлкәһендә эшләй торған һөнәргә уҡып сыҡтым барыбер. Тик тормошомдан уңманым. Ике тапҡыр кейәүгә сыҡтым. Йәшәп булманы. Сит илгә киттем. Унда бәхетемде таптым. Әммә үтә ҡыҫҡа булды ул бәхет тигәндәре. Яратҡан кешем менән биш йыл ғына йәшәп ҡалдым, көтмәгәндә яҡты донъянан китеп барҙы.

Эй ҡыйын... Сит илдә бер үҙем. Яңы йылда ултырам диңгеҙ буйында. Һағындырған. Бөтәһен дә байрам менән ҡотлап сыҡтым. Атайым менән әсәйемә лә шылтыраттым. Төнгө өсөнсө яртылар тирәһе ине. Оҙаҡ алманылар, йоҡларға ятҡан булғандар, күрәһең. Ниһайәт, атайымдың тауышы ишетелде. Байрам менән ҡотланым да: "Атай, бер нәмә һораһам, үтәйһеңме?" - тинем. Аҡса һорай тип ҡурҡтымы икән, өндәшмәй торҙо. Һорауымды ҡабатлағас, ризалашты. "Ҡыҙым, мин һине яратам, тип әйт әле, атай!" - тинем. Үҙемдең күҙемдән йәштәр субырлап аға. Атайым мин әйткән һүҙҙәрҙе ҡабатланы. "Ә хәҙер әсәйемде саҡыр әле, зинһар", - тинем. Ул да йоҡлағандыр, ахыры. Бер аҙҙан тауышы ишетелде. Уны ла байрам менән ҡотланым да: "Әсәй, һинән бер нәмә һораһам, үтәйһеңме?" - тинем. Ул да аптырап китте. Шунан: "Әйт һуң..." - тине. "Ҡыҙым, мин һине яратам, тип әйт әле, әсәй!" - тинем. Тағы берәй нимә һорап ҡуймаһын, тигән һымаҡ ул да тиҙ генә ҡабатлай һалды. Аҙаҡтан үкереп илауым! Диңгеҙ генә белде хәлемде...

...Яратыуға кеше һәр ваҡыт мохтаж. Әсә һөйөүеме ул, мөхәббәт хисеме - әҙәм балаһы үҙенең яратылыуын белеп йәшәргә тейеш. Психологтар әйтеүенсә, әсә кешегә балаһын көнөнә һигеҙ тапҡыр ҡосағына алып һөйөргә кәрәк икән. Яратылмай үҫкән бала ҡаты бәғерле була, тиҙәр, улар башҡаларға ла наҙ бүлә алмай. Яратыуҙан бала боҙолмай. Һөйөлөп үҫкәндәр бүтәндәргә лә мөхәббәтле, һөйкөмлө була. Ҡаты күңелле атаәсәнән хатта енәйәтселәр ҙә үҫеүе ихтимал, сөнки күптәре оло тормошта бала саҡта алмаған наҙҙың үсен ҡайтара.

Ата-әсә фатиһаһы - ул тормоштағы бәхет нигеҙе, уңыш асҡысы. Балалар бәхетле булһын өсөн изге теләктәрендә ҡабатлап ҡына торорға кәрәк. Бәләкәстәрҙең үҙҙәренә лә дөрөҫ теләк теләргә өйрәтеү мөһим.

...Журналист һөнәре миңә күп күренекле шәхестәр менән танышыу, һөйләшеү бәхете бүләк итте. Уларҙың һәр ҡайһыһы күңелендә ниндәйҙер яҡты эҙ ҡалдыра, фәһем бирә. Данлыҡлы артистарыбыҙҙың береһенең һөйләгәне һаман да хәтеремдә: "Мин бәләкәй саҡта атайым менән әсәйем айырылышҡан. Әсәйем яңынан тормошҡа сыҡты. Икенсе ергә күсеп китте. Мин өләсәйем тәрбиәһендә ҡалдым. Хисле бала булғанмындыр инде, күрәһең. Гел тау башында ултырырға ярата торғайным. Таң һарыһынан менәм дә тирә-яҡҡа һоҡланам һәм киләсәктә артист булырға хыялланам..."

"...Таңда фәрештәләр ергә төшә. Шул ваҡытта теләгән теләктәр ҡабул була, сөнки фәрештәләрҙең "Амин!" тигән сағына тура килә", - ти торғайны элек өлкәндәр. Кискә ҡарағанда иртә хәйерлерәк, тип әйтеүҙәре лә юҡҡа түгел. Оло эште лә кис башламайҙар, оҙон юлға ла таңдан сығалар.

Теләкте лә эстән генә уйламай, әҡысҡырып әйтергә кәрәк. Юҡҡа ғынамы ни иң башта телгә алған егерме йәшлек ҡыҙ әсәһенән үҙен яратыуы хаҡында ҡысҡырып әйтеүен һорай. Һуҙ матдиләшә. Күренекле яҙыусы Пауло Коэльо әйтеүенсә, һүҙ Йыһанға аша һәм бөтөн көстәр, ошо фекерҙе тормошҡа ашырырға ярҙам итә башлай.

Шуға бер ваҡытта ла яман һүҙҙе ҡысҡырып әйтергә ярамай. Яңыраҡ ишеткән бер ғибрәтле хәл бығa тағы ла инанырға мәжбүр итте.

...Тәүге балаһы тыуғас, сабыйының шул тиклем ҡулсыр, тиктормаҫ булыуынан арыған йәш әсә: "Эй, тик ултыра торған ғына бала булһын ине ул", - тип әйтеп ысҡындыра. Йә, Хоҙай! Алланың "Амин!" тигән сағына тура килә бит был һүҙҙәр. Икенсе сабыйы... ғәрип булып тыуа. Коляскала ултырып ҡына торған бала тәрбиәләргә тура килә ата-әсәгә. Инде ул сабыйҙың үлгәненә лә байтаҡ йыл үтте. Ошо хаҡта үҙенең ауыҙынан ишетеп тетрәндем. Хоҙайҙан "һорап" алған балаһы ғүмерлек ғазапҡа әйләнгән бит, тәүбә!

Яҡындарыбыҙға ла, балаларыбыҙға ла, туғандарыбыҙға ла яҡшы һүҙҙе йәлләмәйек. Йәш саҡта яҙыусы һәм уҡытыусыбыҙ Роберт Байымов ағайҙың "Бикле хазина" тигән хикәйәһен уҡып, бик тетрәнгәйнем. Ғүмер буйы бергә йәшәп тә бер йылы һүҙ әйтмәгән әбейен ерләп ҡайтҡас, үҙенең асышынан аҡылдан яҙып киккә еткән ҡарт хәлендә ҡалмаһаҡ ине. Олоғайып бөткән балаларыбыҙҙы ла йоҡлағанда ғына түгел, ә ҡосағыбыҙға алып, тупылдатып һөйөүҙән бер кем дә тыймай ҙа баһа беҙҙе. Үндай яратыуҙың гонаһы юҡ бит.

Әле телгә алып киткән миҫалдарҙың барыһы ла ысын тормоштағы кешеләр. Билдәле шәхестәр булғанға күрә уларҙың исемен атауҙы урынлы тип тапманым. Үҙем менән булған бер ваҡиғаны ла өҫтәп киткем килә. Бер ваҡыт күренекле генә ханым менән осратыу менән тәңкит һүҙҙәрен яуҙыра башланы: "Кеше шундай шиғыр яҙамы ни?" "Ниндәй шиғыр?" - тим. "Яратылмай йәшәү" тигән ҡот осҡос шиғыр яҙғанһың бит. Нисә көн йоҡлай алмай йөрөйөм, уйланам да уйланам, йөрәкте айҡаның бит", - ти был. Шулай тигәс кенә еңел һулап ҡуйҙым. Уның һүҙҙәре тәңкит түгел, ә минең өсөн маҡтау ине. Яҙмамды ла ошо шиғыр юлдары менән тамамлағым килә.

*Яратылмай йәшәү - туңып ҡалған бөрө,*
*Емештәрҙән мәхрүм бер ағас.*
*Күкрәк тулы моңдо йөрәгендә бикләү,*
*Һайрай алмаҫ өнһеҙ һандуғас.*

*Яратылмай йәшәү -*
*яумай үткән ямғыр,*
*Йотом һыуға сарсап көн итеү.*
*Һөйөлмәйсә йәшәү - бәхетһеҙҙәр икәү,*
*Бер-береңдең йәнен кәмһетеү.*

*Яратылмай йәшәү - мәңге күңел өшөү,*
*Ысыҡ тамсы зәрәү буранда.*
*Йылы ышыҡ юллап, һулышыңдан сәсәп,*
*Өйһеҙ ғүмер итеү урамда.*

**Зәһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

✓ ***Исемемдең яҙмышыма тәьҫире көслө булыуына ышанам. Исемдәр бер үк булһа ла, мин Мортаза олатайға оҡшарға тырышмайым, сөнки һәр кемдең үҙ булмышы, характеры, ынтылыштары.***



АТЫҢ КЕМ?

# УЛАР МОРТАЗА ИСЕМЛЕ



***Өфө ҡалаһында йәшәүсе Мортаза исемле 4 йәшлек малайҙың әсәһе Лениза Булат ҡыҙы Нафиҡова һөйләй:*** 2003 йыл. Мин 2-се курс студенты. Ҡуркыу белмәгән, юғары маҡсат менән янып йөрөгән 19 йәшлек ҡыҙ бала. Мортаза Рәхимовты Президентлыҡҡа үткәреү кампанияһында агитацион эш алып барыусылар рәтендә йөрөйөм.

Шулай һупайлы биҫтәһендә урынлашҡан 9 ҡатлы биш йортто үтеп сығырға тейешмен. Һәр ишеккә шаҡып, төрлө кешеләр менән һөйләшеп, кемеһенән маҡталып, кемеһенән әрләнеп, ишетмәгәнде ишетеп йөрөй торғас, ҡурҡа башланым. Шулай ҙа бөтә көсөмдө йыйып, ҡурҡыуымды баҫып, биш йорттоң барыһын да үтеп сыҡтым. Әйткәндәй, шул ваҡыттан алып был урам яғына бөтөнләй бармаҫҡа тырышам.

Подъездар, ҡаттар буйлап йөрөгәндә: "Иҫән-һау булһам, Мортаза Рәхимов Президент булып үтһә, киләсәктә улым тыуһа, уға мотлаҡ Мортаза тип исем ҡушасаҡмын!", - тип үҙемә һүҙ бирҙем.

Ул ваҡыттан һуң 16 йыл үткәс, улыбыҙ тыуҙы. Малай буласағын белгәс, алдыбыҙҙа исем һайлау мәсьәләһе лә торманы, исем әҙер ине бит инде. Исемдең дә ниндәйе бит әле!

Улым Мортазаға хәҙер 4 йәш. Уны исеменә тап төшөрмәслек итеп, илебеҙгә, телебеҙгә, милләтебеҙгә кәрәкле, иманлы, тәүфиҡлы һәм тәүәккәл шәхес итеп тәрбиәләргә яҙһын. Беҙгә бәхетле бала саҡ, өмөтлө үҫмер-йәшлек йылдары, иркенләп, ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшергә мөмкинлектәр тыуҙырған, Башҡортостаныбыҙ өсөн бихисап матур эштәр эшләгән, халҡыбыҙҙың олуғ шәхесе - Мортаза Рәхимов һәр саҡ беҙҙең йөрәктәрҙә. Үҙенең артынан күпме Мортазалар ҡалдырҙы ул. Уларҙың һәр ҡайһыһы республикабыҙ, илебеҙ өсөн ныҡлы терәк булһын.

***Мортаза Ханнанов, Өфө дәүләт сәнғәт институты студенты һөйләй:*** Институттың "Драма һәм кино актеры" факультетында уҡыйым. Үҙем Ишембай районы Кинйәбулат ауылынан.



Мортаза Ғөбәйҙулла улын, әлбиттә, бик яҡшы беләм. Ул беҙҙең республиканың Беренсе Президенты, билдәле сәйәсмән, рухлы һәм бөйөк шәхесебеҙ. Мин 2003 йылдың декабрендә, ҡыҙыу һайлауҙар барғанда, ғаиләбеҙҙә дүртенсе бала булып донъяға килгәнмен. Атайым менән әсәйем Мортаза Ғөбәйҙулла улына теләктәшлек белдереп, миңә уның исемен ҡушҡан. Был исемдең мәғәнәһе бик матур, ул "яҡты, һайлап алынған", тигәнде аңлата.

Исемемдең яҙмышыма тәьҫире көслө булыуына ышанам. Исемдәр бер үк булһа ла, мин Мортаза олатайға оҡшарға тырышмайым, сөнки һәр кемдең үҙ булмышы, характеры, ынтылыштары, ғөмүмән, кешеләр бер үк төрлө була алмай. Шулай ҙа мин үҙемдә, уның кеүек үк, ҡыйыулыҡ, ойоштора белеү һәләте барлығын күрәм һәм уларҙы үҫтерәм, нығытам. Шулай уҡ рухлымын, Башҡортостанымды, халҡымды, тыуған телемде, сәнғәтебеҙҙе яратам. Республикабыҙҙың Рәсәй составындағы көслө, ҡеүәтле төбәк булыуына һәм беҙ күп төрлө милләттәр менән бергә дуҫ һәм татыу йәшәүебеҙгә ҡыуанам.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

АҢЛАТАБЫҘ

# ҮҘЕҢ ИДАРА ИТ



**Берҙәм биометрик системала үҙең тураһындағы мәғлүмәтте алып ташларға мөмкинме?**

Биометрия - шәхси биологик һәм холоҡ характеристикалары буйынса кешене идентификациялау. Биометрияның киң таралған биш тибы бар: бармаҡ эҙҙәре, бит төҙөлөшө, тауыш, күҙҙең төҫлө ҡатламы, устың ҡан тамырҙары һүрәте.

Үҙеңдең биометрияңды теләһә ҡайһы ваҡытта алып ташларға һәм мәғлүмәттәрҙе эшкәртеүгә ризалыҡты юҡҡа сығарырға мөмкин! Ҡануниәт тарафынан бындай гәмәлдән баш тартыуҙы сикләгән ваҡыт ҡаралмаған. Әгәр һеҙ бөгөнгә тиклем үҙегеҙҙең биометрик мәғлүмәтегеҙҙе йыйыуға һәм эшкәртеүгә яҙма ризалыҡ бирмәһәгеҙ, "Дәүләт хеҙмәттәре. Биометрия" мобиль ҡушымтаһында йәки коммерция ойошмаларында ошондай мәғлүмәттәр ҡалдырмаһағыҙ, һеҙҙең хаҡта бындай мәғлүмәттең Берҙәм биометрик системала булыуы мөмкин түгел.

**Биометрияны системанан нисек алып ташларға?**

Үҙеңдең биометрияңды һәм шәхси мәғлүмәттәреңде эшкәртеүгә ризалыҡты теләгән ваҡытта мәғлүмәт һаҡланған бөтә системаларҙан алып ташларға мөмкин. Ризалыҡты бер нисә юл менән кире алырға була:

- биометрия тапшырған ойошмала. Мәҫәлән, банкта.
- Биометрик технологиялар үҙәгенең Берҙәм биометрик система операторы адресына уңайлы форматта яҙма мөрәжәғәт ебәреү.
- Дәүләт хеҙмәттәрендәге шәхси кабинетта "Биометрия" бүлегендә.

**Ҡасандыр бирелгән биометрияны эшкәртеүҙе тыйырға буламы?**

Күп функциялы үҙәктең яҡындағы офисында шәхси биометрик мәғлүмәттәрҙе йыйыуҙан һәм уларҙы Берҙәм системала урынлаштырыуҙан баш тартырға мөмкин. Бының өсөн паспорт һәм СНИЛС талап ителә (алдан ғаризә яҙырға кәрәкмәй). Ғариза Күп функциялы үҙәктән Берҙәм биометрик система операторына тапшырыла. Шунан һуң бер система ла йәки сервис та уны файҙалана алмай.

**Ни өсөн биометрияны, йәғни кешене уникаль биологик һәм холоҡ характеристикалары буйынса идентификациялауҙы рәсмиләштерәләр?**

Берҙәм биометрия системаһында теркәлгән биометрия ярҙамында финанс хеҙмәттәренән файҙаланырға, e-SIM йәки электрон ҡултамға рәсмиләштерергә, көйәрмән картаһы алырға, Дәүләт хеҙмәттәрендә авторлашырға була. Киләсәктә бындай биометрия буйынса офисҡа үтергә, тауар һатып алған йәки метрола йөрөгән өсөн түләргә, имтихан тапшырырға һәм нотариус хеҙмәттәренән файҙаланырға мөмкин буласаҡ. Был хәрәкәт итеүе сикле граждандар, алыҫ ауылдарҙа йәшәүселәр йәки сәфәргә сығыусылар, эшҡыуарҙар, шулай уҡ интернет аша эшләүселәр өсөн уңайлы.

**Һеҙҙең биометрик мәғлүмәтте кем ҡуллана ала?**

Дәүләт кенә ҡулланырға тейеш. Берҙәм биометрик система Рәсәй Федерацияһының Һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы һәм Рәсәй Федерацияһының Үҙәк банкының башланғысы менән ойошторолдо. Уны һеҙҙең ризалыҡтан тыш ҡулланыу мөмкин түгел, һәм система ышаныслы яҡланған.

**Атап үтелгән системала һеҙҙең биометрияның булыу-булмауын нисек белергә?**

Дәүләт хеҙмәттәрендә ҡарарға була. Бының өсөн "Профиль" бүлегенә инергә, "Биометрия" өлөшөн һайларға кәрәк. Әгәр биометрияғыҙҙы рәсмиләштерелмәгән булһағыҙ, "Биометрия теркәлмәгән" тигән яҙыу сығасаҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Ҡырмыҫҡа һәм сиңерткә

Мәктәп программаһы буйынса барығыҙ ҙа Эзоп теле менән яҙылған мәҫәлдәрҙе ятлағанһығыҙҙыр, шулай бит? Мәҫәлән, "Ҡырмыҫҡа менән Сиңерткә". Йөкмәткеһенә килгәндә, Ҡырмыҫҡа йәй буйына бил бөгөп, тир түгеп ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгәндә, Сиңерткә йыр һуҙып, һикерәнләп көн үткәрә лә, ҡышын, асыға башлағас, Ҡырмыҫҡаға бурысҡа ашарға һәм эсергә биреүен үтенеп килә.

Минең был мәҫәлгә ҡарата үҙемдең мәҫәлем бар: Ҡырмыҫҡа ғүмер буйы баш ҡалҡытмай эшләй, хаҡлы ялға сығыр алдынан сәләмәтлеген юғалта, энергияһы ҡалмай. Ғүмер көҙөнөң ахырында тормоштан ҡәнәғәтлек алыр өсөн көнөн һорап Сиңерткәгә килә. Сиңерткә уға, терһәк яҡын да, тешләп булмай шул, тип яуаплай. Йәғни, артыҡ аҡыллы булырға ла ярамай, тормош, әгәр уны үҙең ҡатмарлаштырмаһаң, ауыр түгел.

## Өсөнсө арҡаҙаш Һеҙҙең ысын ролегеҙ

Үҙегеҙгә был тормошто һайлауығыҙ өсөн етди сәбәп уйлап табырға кәрәк - был донъяға ниндәй роль башҡарыр өсөн тыуғанһығыҙ, йәғни һеҙҙең миссияғыҙ.

## Corpus infinitum-дағы ролегеҙ

Ер йөҙөндәге барлыҡ Кешелекте кеше тәненә оҡшаған бер тән тип күҙ алдына килтерегеҙ. Беҙ - ошо corpus infinitum-дың күҙәнәге. Тәндә беҙ теләмәгән насар күҙәнәкте нисек атайбыҙ? Дөрөҫ, яман шеш күҙәнәге. Әгәр һеҙ Ерҙәге ғүмерегеҙҙе бушҡа сарыф итһәгеҙ, Кешелек тәнендәге яман шеш күҙәнәге булып торасаҡһығыҙ. Һәм беҙ ул күҙәнәкте барлыҡ ысулдар менән юҡ итергә, бөтөрөргә тырышабыҙ. Үҙегеҙҙең ролегеҙҙе асыҡлай алмаһағыҙ, һеҙҙе лә шундай яҙмыш көтә.

Тормошоғоҙҙа барыһы ла кирегә китә, финанстарығыҙ, никахығыҙ, эшегеҙ, сәләмәтлегегеҙ һәм йәмғиәттәге эшмәкәрлегегеҙ ҡәнәғәтләндермәй икән, сирҙең билдәләрен дауалау файҙаһыҙ. Бары тик шуны аңлағыҙ: һеҙ үҙ ролегеҙҙе башҡармайһығыҙ!

Үҙегеҙҙең ролегеҙҙе табығыҙ һәр әлекке тормошоғоҙҙан баш тартығыҙ. "Бурыслымын", - тигән фекер артынан сығығыҙ һәм бөгөнгө ролегеҙҙе уйнауҙан туҡтағыҙ. "Етәрлек аҡсам булһа, теләгәнемде эшләр инем", - тип, лотереяла аҡса отоуығыҙҙы көтмәгеҙ. Бындай осраҡтың бөтөнләй булмауы ла ихтимал.

## Ер йөҙөндәге барлыҡ алтындар

Бына һеҙ үҙегеҙгә бирергә тейешле һорау: "Ер йөҙөндәге барлыҡ байлыҡҡа эйә булһам, нимә эшләр инем?" Бармаҡ шартлатып ҡына аҡса эшләй алһағыҙ, нимә эшләр инегеҙ? 12 өй һатып алып, 14 экзотик круизда йөрөп, 28 иң шәп автомобиль һатып алдығыҙ икән ти, артабан? Тәүҙә ер йөҙөндәге барлыҡ аҡсаға эйә булғас нимә эшләргә теләгәнегеҙҙе уйлағыҙ, һунынан шуларҙы эшләгеҙ һәм шунда ғына барлыҡ байлыҡҡа эйә булырһығыҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 12 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 1.05, 1.50, 2.35, 3.05, 3.20, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Великая. Золотой век". [12+]
0.10 Д/ф Премьера. "Александр Проханов. Исповедь". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 17.45, 18.15, 4.00 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [12+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00, 3.30 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан.**
**23.30 Х/ф "Дневник поэта". [12+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**

## 13 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Великая. Золотой век". [12+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз).**
**11.00, 23.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15, 23.30, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 3.15 Башҡорттар. [6+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 23.45, 3.45 Письма солдатам. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

## 14 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Великая. Золотой век". [12+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 3.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**10.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**10.45, 13.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**11.00, 3.30 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык представляет..." [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Наследство". [12+]**

## 15 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Д/с Премьера. Проект "Цивилизации". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Великая. Золотой век". [12+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Дорогие мои, Шурави". [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00, 20.30, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 Письма солдатам. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**21.20 Хоккей. "СКА" (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.00 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**

## 16 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 "Матадор". [16+]
0.30, 1.15, 2.00, 2.45, 3.30, 4.15, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Хором! [12+]
0.30 "Истории Большой Страны". [12+]
1.25 Х/ф "Французская кулинария". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30, 5.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15, 19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 3.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [6+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [6+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Ете егет". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры представляет..." [12+]**
**23.45 Остаз. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Концерт. [12+]**
**3.30 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]**

## 17 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.25 Д/ф "Правдивая история. Тегеран-43". К 100-летию Геворка Вартаняна. [12+]
15.35 "Горячий лед". Фигурное катание. Спартакиада сильнейших-2024. Финал Гран-при. Танцы. Произвольная программа. Мужчины. Произвольная программа. Прямой эфир.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
19.15 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 "Закрытый показ" с Александром Гордоном. [16+]
2.00, 2.45, 3.30, 4.15, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Своя чужая дочь". [16+]
0.40 Х/ф "Сердечные раны". [12+]
4.10 Х/ф "Арифметика подлости". [16+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00, 4.15 "Бай". [12+]**
**8.30, 2.15 "Ете егет". [12+]**
**9.15 Остаз. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Крылья. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Лит-ра. [6+]**
**11.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.15 Алтын тирмә. [12+]**
**13.00, 3.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 1.45 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 4.45 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 Д/ф "Судьба. Миллят Хакимов". [12+]**
**17.45 Концерт. [12+]**
**18.50 Хоккей. "Локомотив" (Ярославль) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Спектакль "Руди - never off". [12+]**
**1.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**3.30 История одного села. [12+]**
**5.45 Аль-Фатиха. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 18 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00, 0.45, 1.30, 2.15, 3.00, 3.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Х/ф "Влюблен по собственному желанию". К 80-летию Олега Янковского. [12+]
15.45 "Горячий лед". Фигурное катание. Спартакиада сильнейших-2024. Финал Гран-при. Пары. Женщины. Произвольная программа. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Абрек". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 1.30 Х/ф "Золотые небеса". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
13.00 Большие перемены.
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.45, 2.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15, 16.45, 18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Историческая среда. [12+]**
**15.30, 3.30 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**17.00, 22.45 Концерт. [12+]**
**18.30 Замандаш. [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Флагман инженерного образования. К 30-летию Республиканского инженерного лицея-интерната. [12+]**
**20.30 Преображение. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 4.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**1.00 Спектакль "Черный иноходец". [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.Яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Февраль (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (2) дүшәмбе | 7:06 | 8:47 | 13:30 | 16:22 | 18:13 | 19:55 |
| 13 (3) шишәмбе | 7:04 | 8:45 | 13:30 | 16:24 | 18:15 | 19:57 |
| 14 (4) шаршамбы | 7:02 | 8:43 | 13:30 | 16:26 | 18:17 | 19:59 |
| 15 (5) кесе йома | 7:00 | 8:41 | 13:30 | 16:28 | 18:19 | 20:01 |
| 16 (6) йома | 6:58 | 8:39 | 13:30 | 16:29 | 18:21 | 20:03 |
| 17 (7) шәмбе | 6:56 | 8:37 | 13:30 | 16:31 | 18:24 | 20:05 |
| 18 (8) йәкшәмбе | 6:54 | 8:34 | 13:30 | 16:33 | 18:26 | 20:07 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Өмөт, ышаныс - идара итеп булғандар өсөн, ә иҫбатлау үҙ-үҙҙәре һәм башҡалар менән идара итә белгәндәр өсөн кәрәк.*

*(Джордано Бруно).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 10 ФЕВРАЛЬ - ДИПЛОМАТИК ХЕҘМӘТКӘР КӨНӨ

**Рәсәйҙә был һөнәри байрам 2002 йылдан - Рәсәйҙең Сит ил эштәре министрлығына 200 йыл тулыу айҡанлы көндән алып билдәләнә.**

Польша бойороғо тураһында ла 1549 йылда тап 10 февралдә тәүге тапҡыр телгә алына, һәм байрам датаһы быға бәйле булыуы ла ихтимал. Шулай ҙа Рәсәйҙең башҡа дәүләттәр менән бәйләнеш тота башлауы унан күпкә боронораҡ башланған. Ә сит илдәрҙә тәүге илселектәр 1634 йылда Швецияла, 1673 йылда Польшала барлыҡҡа килгән.

1718-1720 йылдарҙа Польша бойороғо Сит илдәр коллегияһы итеп үҙгәртелә. Әммә хәҙерге Сит илдәр министрлығы 1802 йылда император Александр I Министрҙар кабинеты һәм башҡа министрлыҡтарҙы булдырғандан алып эшләй. Был яңы ведомствоның уңышлы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Рәсәй 1913 йылда 47 ил менән дипломатик бәйләнеш тота һәм 200-ҙән ашыуында вәкиллектәр булдыра. 1917 йылғы Октябрь революцияһынан һуң, дипломатик бурыстар яңы ойошторолған Сит ил эштәре буйынса халыҡ комиссариаты иңенә ята. Бер нисә тапҡыр атамаһын үҙгәртеп, бөгөнгө Сит ил эштәре министрлығы мөһим бурыстарҙы үтәп килә һәм Рәсәй 200-гә яҡын ил менән дипломатик бәйләнештәрҙә, 144 илселеге бар. 1991 йылдан был министрлыҡты А. В. Козырев (1990-1996 йылдар), Е.М. Примаков (1996-1998 йылдар), И.С. Иванов (1998-2004 йылдар) һәм 2004 йылдың 9 мартынан алып бөгөнгәсә Сергей Викторович Лавров етәкләй.

Сит ил эштәре министрлығы үҙ эшмәкәрлегендә Рәсәй Президенты 2016 йылдың 30 ноябрендә раҫлаған "Рәсәй Федерацияһының тышҡы сәйәсәт концепцияһы"на таянып эш итә. Был документҡа ярашлы, илебеҙҙең тышҡы сәйәсәте мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелә, мәҫәлән: милли хәүефһеҙлекте, суверенитетты, илдең территориаль бөтөнлөгөн тәьмин итеү, иҡтисадтың тотороҡло үҫеше өсөн шарттар булдырыу, халыҡ-ара тыныслыҡ һәм тотороҡлоҡто нығытыу, барыһының да дөйөм хәүефһеҙлеген нығытыу, БМО-ның ролен арттырыу, сит дәүләттәр менән ике һәм күп яҡлы файҙалы һәм тигеҙ хоҡуҡлы партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү. Рәсәйҙең тышҡы сәйәсәтенең төп принциптары ла һис үҙгәрешһеҙ ҡала: үҙаллылыҡ, асыҡлыҡ, прагматизм, күп векторлыҡ, милли мәнфәғәттәрҙе яҡлауға йүнәлеш.

Был байрам көнөн билдәләүсе шәхестәр араһында сығыштары менән Башҡортостандан булғандар ҙа байтаҡ. Башватҡыста уларҙың ҡайһы берҙәрен танырһығыҙ, моғайын.




1 — *СССР-ҙың Сәғүд Ғәрәбстанындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле*

2 — *2015 йылдан Украиналағы хәлде көйләү буйынса контакт төркөмөндә РФ-ның махсус вәкиле*

3 — *Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле вазифаһын башҡарыусы*

4 — *Рәсәйҙең Конго Республикаһында тулы хоҡуҡлы илсеһе*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**4-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бөрөз. Рәхимов. Тренд. Әкиәт. Алйот. Өстаған. Адмирал. Туҙан. Камера. Афина. Али. Сабаҡ. Нәмә. Цирк. Хәйер. Ел. Пи. Утар. Янут. Әрмән. Кусимов. Сағалаҡ.

**Вертикаль буйынса:** Аҙнабаев. Әхмәҙиева. Редакция. Рәшә. Нәркәс. Төлкө. Бәхет. Аскет. Биҙа. Екатеринбург. Токио. Завод. Ваҡ. Ант. Сәхрә. Урҙа. Алҡа. Төн. Ҡарын.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 февраль "Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева), шағир иленә сәйәхәт. 14.00, 19.00 12+

**14 февраль "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**15 февраль "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**16 февраль "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+

**17 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14-15 февраль Премьера! "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләжев), драма. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15 февраль "Каменный гость"** (А. Пушкин). 19.00 12+

**16 февраль "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 18.00 0+

**17 февраль "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 15.00 0+

**18 февраль "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 февраль "Зима в Париже"** концерт. 6+

**"Лед и Пламя"** музыка һәм бейеү. 6+

**15 февраль** БР Йәштәр симфоник оркестры концерты. 6+

**17 февраль "В ожидании чуда".** 11.00 0+

**"Музыкальный этикет"** балалар өсөн. 13.00 0+

**"Сокровенные пьесы"**, П. Лаул, фортепиано. 18.00 6+

**18 февраль** Ирина Крюкова концерты, орган. 18.00 6+

**"Ирландское шоу"** City Pipes волынкасылар оркестры һәм Celtic Wind ирланд бейеүе ансамбле концерты. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16 февраль Премьера! "Выстрел. Метель"** (А. Пушкин әҫәрҙәре буйынса). 14.00 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 февраль Премьера! "Ҡыҙ күңелендә - балалы бишек, ир күңелендә - эйәрле ат".** "Ашҡаҙар" эстрада-фольклор төркөмө концерты. 6+

## БР Милли музейы

**13 февраль "Боронғо һунарсылар эҙенән"** сара. 15.00

**14 февраль "Генерал Кусимов"** күргәҙмәһе асыла. 15.00 6+

**15 февраль "Ватаныма хеҙмәт итәм!"** сара. 12.00 6+

**"Афганистан - вывод войск"** күргәҙмәһе асыла. 15.00 12+

**16 февраль** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**17 февраль "Сулпылар сыңы"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 6+

**"Экоакадемия"** 15.00 6+

**"Йәш археолог курсы"** 15.00 6+

**18 февраль "Ковроделкин"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+

*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# УЙЫН МЕНӘН ТУЛЫ ТЕАТР...

**Гәзит уҡыусыларыбыҙ араһында баш ҡалалағы театрҙарға яратып йөрөгән тоғро тамашасылар күптер. Шуға ошо өлкәләге яңылыҡтар менән таныштырыу ниәтендә был юлы М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының баш режиссеры Рөстәм Милләт улы ХӘКИМОВ менән коллективтың һуңғы осорҙағы эшмәкәрлеге тураһында әңгәмәләштек.**



**Йәштәр театры тормошонда ниндәй яңылыҡтар бар?**

- Театр тормошо бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс, һәр көн ниндәйҙер яңылыҡ булып тора. Гастролдәр, фестивалдәр, семинарҙар - береһе лә беҙҙең коллективты урап үтмәй. Киләһе йылға бер нисә фестивалгә заявкалар ебәрелгән дә инде, улар һайлау этабын көтә. Ә гастролдәргә килгәндә, республика ауыл-ҡалаларына йыл дауамында спектаклдәр менән сығып торабыҙ. Күптән түгел Мостай Кәримдең тыуған яғында, Шишмә районының Келәш ауылында әҙиптең "Ауыл адвокаттары" әҫәре буйынса ҡуйылған "Силсәүит, Алдар һәм Адвокат" спектакле менән сығыш яһаныҡ. Халыҡтың бик яҡшы һәм ихлас ҡабул итеүенә һоҡландыҡ. Былтыр ҙа "Аҡмулла" спектакле менән шағир-мәғрифәтсенең тыуған яғында, Миәкәлә йөрөп ҡайтҡайныҡ. Яңы йыл алдынан ғына "Ҙур гастролдәр" сиктәрендә Брянск ҡалаһына барҙыҡ. Ә уларҙың артистары, үҙ сиратында, беҙҙең тамашасы менән таныштылар. Унан һуң, республикала, баш ҡалабыҙҙа уҙған "Әйҙә, уйнарға!", "Китап байрам" кеүек ҙур сараларҙан да ситтә ҡалмайбыҙ. Театр бер ваҡытта ла үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәмәй.

Республикабыҙҙан ғына түгел, сит өлкәләрҙән дә режиссерҙар, хореографтар, рәссамдар, композиторҙар, инсценировка авторҙары йәлеп ителә. Бер-беребеҙ менән аралашып, тәжрибә бүлешеп ижад итәбеҙ. Уҙған йылда беҙҙең театрҙа М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының баш режиссеры, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Айрат Абушахманов Канада драматургы С. Лебо әҫәре буйынса "Дейеүкәй" спектаклен ҡуйҙы. Ошо көндәрҙә шул уҡ театрҙан БР-ҙың атҡаҙанған артисы, режиссер Фирғәт Ғарипов М. Ғиләжевтың "Аҡһаҡ" драмаһын сәхнәләштерә. Һәр режиссерҙың үҙ ысулы, спектаклде төҙөүҙә үҙ концепцияһы бар һәм саҡырылған режиссер менән хеҙмәттәшлектең төп бурысы: актерҙарға үҙ көсөн һынап ҡарау, яңы режиссер менән эшләп, үҙ геройын һынландырғанда ниндәйҙер яңы мөмкинлектәр асыу.

**Һеҙҙең театрҙа балалар өсөн спектаклдәр бик күп ҡуйылды, улар араһында шәхсән һеҙ эшләгәндәре лә бар. Йәш тамашасылар ижадығыҙ буйынса фекерҙәрен белдерәме һәм уларҙы ылыҡтырырлыҡ спектаклдәр ниндәй булырға тейеш?**

- Өлкәндәр өсөн ҡуйылған спектаклдәр менән бер рәттән беҙ, әлбиттә, кескәй тамашасыларыбыҙ тураһында ла онотмайбыҙ, заман менән бергә атларға, уларҙы нимә борсоуын, нимә менән йәшәүен, нимә менән ҡыҙыҡһыныуын аңларға тырышабыҙ. Был йәһәттән былтыр беҙҙә балалар өсөн бер нисә яңы спектакль ҡуйылды. Береһе "Ете батыр тураһында хикәйә". Ул бик тә ҡыҙыҡ темаға ҡоролған: һәр хәлдә, компьютер уйындарын яратҡан балаларыбыҙ тейешенсә баһаларлыҡ һымаҡ. Сөнки спектаклдә ҡыйыу көрәшселәр Тимур менән Сабина компьютер уйындары аша беҙҙең донъяға осраҡлы рәүештә яуыз Ҡатилды "сығарып ебәрә". Хәҙер Ерҙе бөтә халыҡты берләштереп, төрлө милли батырҙар ғына ҡотҡара ала. Тимур батырҙарҙы быға ышандыра һәм еңеү көсө нимәлә булыуын аңлай алырмы? Беҙҙең балалар бит Флеш, Бэтмен, Үрмәксе-Кеше, Халк кеүек Америка әкиәт-фильмдары геройҙарын яҡшы белһә лә, үҙебеҙҙең Урал батыр һәм башҡа халыҡтарҙың батырҙары тураһында хәбәрҙар булмауы мөмкин. Үҙебеҙ, өлкәндәр ҙә, онотоп китәбеҙҙер әле. Ә бит беҙҙең әкиәт батырҙары үҙ әһәмиәте буйынса башҡа геройҙарҙан һис ҡалышмай, ҡайһы берҙә өҫтөн тора әле. Һәм беҙҙең бурыс - улар тураһында һөйләү.

Шулай уҡ "Мин башҡорт телен өйрәнәм" тигән спектаклде сәхнәләштерҙек, ул Башҡорт теле көнөнә арналды. Унда Тимерхан тигән малайҙың туған телен белмәүе арҡаһында бәләгә тарыуы һәм дуҫтары - урман хайуандары ярҙамында Урман эйәһе әҙерләгән йомаҡтар дауылын, мәҡәлдәр аҡланын һәм тиҙәйткестәр һаҙлығын еңеп сығыуы тураһында һүҙ бара. Туған телде өйрәнеү проблемаһы, балала бәләкәйҙән туған телгә ҡарата һөйөү уятыу - спектаклдең төп идеяһын тәшкил итте.

Күпселек балалар театрға йөрөргә ярата, быны байрам итеп ҡабул итә һәм күргәндәрен оҙаҡ ваҡыт күңелендә һаҡлай, кисерештәрен оҙаҡ онотмай. Театр - уйын хакимлыҡ иткән урын, унда балалар менән һәм балалар өсөн уйнарға әҙер, һәләтле, ғәжәп өлкәндәр йәшәй. Әкиәт һәм китап персонаждары театрҙа йәнләнә, сәхнәгә сыға һәм шулай улар менән аралашыу мөмкинлеге тыуа. Әкиәттең ысынбарлыҡҡа яҡынлашҡан мөғжизәле урынын нисек яратмаҫҡа? Балаларға тамашасыларҙы сәхнә хәрәкәтенә, уйынға йәлеп иткән интерактив постановкалар бигерәк тә оҡшай. Көндәлек тормошта өлкәндәрҙең балаһы менән уйнарға, хатта уны иғтибар менән тыңларға ла ваҡыты етмәҫкә мөмкин. Шуға күрә бала өсөн уйын һәм әкиәт менән тулы театрға барыу ҡиммәтле, күптән көтөлгән байрамға әйләнә. Кесе йәштәге бала өсөн уйын - тәбиғи ғүмер дауамы. Уйында бала йәшәй, уйында үҫешә, тормошто аңлай һәм ҡиммәттәрҙең төп системаһын формалаштыра. Ысын тормошта һоҡландырған бөтә нәмәне бала һуңынан уйнаған сағында ҡабатлай, әҙәп-әхлаҡ, донъяға ҡараш, тәртип нормалары ла шулай уйнай-уйнай һеңә уның аңына. Шуға ла беҙ көндәлек хеҙмәтебеҙ менән йәш быуында үҙ граждандлыҡ ҡарашын тәрбиәләү һәм уларға аҡыл, изгелеклек, яҡтылыҡ таратыуҙы төп бурысыбыҙ тип күрәбеҙ.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

## ТОРОН-ТОРОНСАЛАР

**Йәшәгән ти беҙҙең заманда әбей менән бабай. Уларҙың торон-торонсаһы бик тә күп булған икән. Әкиәт шулай башлана. "Ә торон-торонсалары нимә һуң ул?" - тип һорай икән өләсәһенән әкиәтте тыңлаған ейән-ейәнсәрҙәре. "Нимә түгел, ә һеҙ булаһығыҙ ҙа инде", - тип шуҡ ҡына яуаплай, имеш, өләсәләре.**

**Торон.** Әүәл был һүҙ "ейән" мәғәнәһендә йөрөгән. Миҫалға: *Торондарҙы олаталары атта йөрөргә өйрәткән. Бер тороно бәйгелә лә ҡатнашҡан.*

**Торон ҡыҙ.** "Торон ҡыҙ" тигәндә, ейәнәсәрҙәр күҙ алдына баҫһын. *Балаҫ һуҡҡан өләсәләрен торон ҡыҙҙар уратып алған.*

**Торпаҡ.** "Торпаҡ" - йәш үгеҙ быҙауҙы белдергән һүҙ. *Һөҙгәк торпаҡ. Торпаҡтарҙы көтөүгә өйрәтеү.*

**Тотмар.** Йөкмәтке, эстәлек тураһында һүҙ барғанда, "тотмар" һүҙе тура килер. *Китаптың тотмары бик тә мауыҡтырғыс. Тәрән тотмарлы телмәр.*

**Төрпө.** Тырнаҡ йышҡыһын ҡулланыусылар уның икенсе атамаһы төрпө икәнен белеп ҡуйһын. *Маникюр ҡулланмаһы төрпөһөҙ булмай. Төрпө шымарып бөткән.*

**Шулай итеп, олатай-өләсәйҙәр торон-торонсаға, телмәребеҙ тотмарға байыһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҮҘ НӘФСЕҺЕН ТЫЙҒАН... солтан булыр

Ҡоҙа булғансы, ныҡ һораш, ҡоҙа булғас, ныҡ һыйлаш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бар нәмәгә лә ышаныу, бер нәмәгә лә ышанмаған кеүек үк, ҡурҡыныс.

**(Дени Дидро).**

Бәхетһеҙлек - иң бөйөк уҡытыусы. Байлыҡ аҡылды иркәләтә, байлыҡтан яҙыу, киреһенсә, аҡылды сыныҡтыра.

**(Уильям Хэзлитт).**

Тышлығына ҡарап китап тураһында фекер йөрөтмә.

**(Инглиз халыҡ мәҡәле).**

Бөйөк эштәр көс менән түгел, ә ныҡышмалылыҡ менән тормошҡа атҡарыла.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Өмөт, ышаныс - идара итеп булғандар өсөн, ә иҫбатлау үҙ-үҙҙәре һәм башҡалар менән идара итә белгәндәр өсөн кәрәк.

**(Джордано Бруно).**

Етди булырға тырыш - был да ғорурлыҡ, әммә ул әйләнә-тирәләгеләрҙең иғтибарына һәм асыуына аҙыраҡ эләгә.

**(Жюль Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йорт төҙөргә була. Тәүҙә ул йорт нигеҙе өсөн тәрән соҡор ҡаҙыуға тотона. Ял минуттарында ул соҡорҙан өҫкә күтәрелеп ҡарай, уға аҫтан тик болоттар йә кешеләрҙең аяҡтары ғына күренеп ҡалғылай.**

**Нигеҙ әҙер булғас, был кеше йортоноң беренсе ҡатының стеналарын һала башлай. Хәҙер инде ул әйләнә-тирәһен иркен байҡай, эргәһенән үткән кешеләрҙе күҙҙән үткәрә ала. Йорт ни тиклем бейеккәрәк үҫкән һайын, уның хужаһына ла күберәк яңы күренештәр асыла башлай. Икенсе ҡаттан тороп, тирә-яҡҡа күҙ һалһа, ул бар урамдың панорамаһын, ә өсөнсө ҡаттан иһә хатта күрше урамды ла ап-асыҡ күреп булыуын төшөнә. Йортоноң ҡыйығында баҫып торғанда иһә кешенең күҙ алдына бар ауыл, уның урамдары, өйҙәре, кешеләре килеп баҫа.**

**Бала саҡта беҙ күп нәмәне күрәбеҙ, тотоп ҡарайбыҙ, ләкин аңламайбыҙ. Үҫә бара беҙ белем алабыҙ, фекер йөрөтөргә өйрәнәбеҙ. Тормошобоҙҙоң стеналары өҫкә табан үҫә барған һайын, беҙҙе уратып алған тирә-яҡ төрлө төҫкә инә. Ҡыйыҡта торғанда беренсе ҡаттағы нәмәләр бәләкәс кенә булып күренә. Ә беренсе ҡатта торғанда ундағы нәмәләр барыһы ла ҙур, етди һымаҡ ине. Үҫкән һайын, аҡылың, белемең, эске донъяң камиллашҡан һайын да шулай була икән. Ә ҡайһы берәүҙәр бит оло йәшкә етһәләр ҙә беренсе ҡатта йөрөүҙе хуп күрә... "**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02.
(453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
08 февраль 15 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111345

1 582218 911006 24005